✓ *Яҡшы һүҙ әйтте, тип һөйөнмә, ихласлығын белмәйенсә; яман һүҙ әйтте, тип көйөнмә, көнсөллөктән икәнен белмәйенсә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

11 - 17 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№19 (541)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эшҡыуарлыҡ...**

майлы ҡалъя түгел шул



6

**Урын кешене биҙәмәй...**

кеше урынды биҙәй!



8-9

**Ихлас шаяртам,**

шаяртыуҙарға ихлас ышанам...



11

**Намаҙға баҫырға...**

иртә лә, һуң да түгел



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баҡса мәле башланды. Баҡса ғаиләңде туйындырыр бер сарамы, әллә күңел һыйыныр урынмы?

***Гүзәл ХАММАТОВА, яҙыусы, тәржемәсе:*** Атайым, яҙыусы Яныбай Хамматов яҙыусылар аҡланында нигеҙ һалып киткән баҡсабыҙҙы ташлағаныбыҙ юҡ, 46 йыл инде хәҙер уны тотҡанға. Әлбиттә, баҡса хужалығын атайым һымаҡ идеаль тәртиптә, еренә еткереп, айышына төшөнөп алып барыуы ауырыраҡ булһа ла, хәлебеҙҙән килгәнсә тырышабыҙ, сөнки, үҙегеҙгә мәғлүм: баҡса көс түкһәң генә емеш бирә. Атайым өйрәткән хеҙмәт һабаҡтарын ҡыҙымдың ғаиләһенә, ейәнсәрҙәремә еткерергә ынтылам, сөнки эш һөйгән кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Беҙҙең ҡартатай бит том-том әҫәрҙәр ҙә ижад итте, бөтмөр баҡсасы ла булды. Ул ултыртҡан алмағас, ҡарағат, ҡурай еләге ҡыуаҡтары әле булһа мул емештәре менән ҡыуандырып тора беҙҙе. Баҡсабыҙҙың мөғжизәһе - атайым орлоҡтан сәсеп үҫтергән Себер һылыуы эрбет - кедр ағасына ла хәҙер 45 йәш инде, ул шулай уҡ нисә йылдар хәҙер сәтләүек биреп ултыра. Мәғрур ҡарағай, ҡупшы шыршы ла үҫә баҡсабыҙҙа. Атайымдың төҫө күреп, ҡәҙерләйбеҙ, яратабыҙ уларҙы. Шуға күрә баҡсаға мин иң тәүҙә рухи бер көс, яңы һулыш, ижадҡа илһам биреүсе сығанаҡ итеп ҡарайым. Әлбиттә, баҡса булғас, ер буш ятырға тейеш түгел: еләген дә, ҡыярын да, помидорын да, йәшел тәмләткес үләндәрен дә үҫтерәбеҙ: балаларға үҙең тәрбиәләп ҡараған, химикатһыҙ йәшелсә-емеш бик тә кәрәк. Үҙем бигерәк тә сәскәләр үҫтерергә яратам. Ҡыҫҡаһы, йәйҙең йәмле көндәрендә тынсыу, туҙанлы ҡала һауаһынан беҙҙе фәҡәт баҡса ҡотҡара, рәхәтләнеп ял да итәбеҙ, ең һыҙғанып эшләйбеҙ ҙә. Академик, яҙыусы Ғайса ағай Хөсәйенов, Ноғман ағай Мусин, Фәниә апай Чанышеваларҙың да баҡсалары беҙҙең тирәлә генә - күршеләребеҙҙән ундыҡ. Яҡында ғына Дим йылғаһы аға, элекке һымаҡ таҙа булмаһа ла, һыу буйында йәнгә рәхәт. Ғөмүмән, баҡса миңә һәм минең ғаиләмә күңел һыйыныр урын ул.

***Юнир САЛАУАТОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** Баҡса, әлбиттә, иң тәүҙә ҡала шау-шыуынан арынып, рәхәтләнеп ял итер, көс йыйыр урын инде ул. Өфөнән 50 километр самаһы ерҙә, Нуриман районының Байгилде ауылы биләмәһендә беҙҙең баҡсабыҙ. Йорт һалғанбыҙ, мунсабыҙ, гараж бар, ике ҡоҙоҡ ҡаҙҙырттыҡ, һыу проблема түгел. Күп итеп картуф сәсәбеҙ, йәшелсә үҫтерәбеҙ - тәрбиәләп, йыйып алған уңыш үҙебеҙгә ҡыш буйына етә. Әйтәләр бит, күмәктең ризығы ла күп, тип. Бына шул беҙҙең хаҡта ла инде, сөнки бөтәбеҙ бергәләп бил бөгәбеҙ. Минең ҡатыным Рәзиә Зөфәр ҡыҙы эшкә бик уңған, баҡсала ул командалыҡ итә. Улым менән киленем дә тырыш, егәрлеләр. Ауыл халҡы менән һәйбәт мөнәсәбәттәбеҙ, бер-беребеҙгә ярҙамлашып йәшәйбеҙ. Үҙебеҙҙең Башҡортостанға етәме һуң инде: еребеҙ ҡара тупраҡлы, уңдырышлы. Үзбәктәр әйтмешләй (гастролдә булғанда һөйләшкәндән), нимә төртһәң дә шытып сығыр. Ситтәр ҡыҙыға беҙҙең ерҙәргә, ана, япондарҙы ҡарағыҙ, ерҙәре бәләкәй генә булһа ла уны һөҙөмтәле файҙаланырға тырышып ятҡан көндәре. Беҙҙә ожмах, әйтергә лә түгел, тик иренмә, эшлә генә! Юғиһә, ҡоролоҡ, ти ҙә хәбәр һөйләйҙәр. Был ҡоролоҡмо ни ул? Юҡ, был иҫкәртеү, ер ҡәҙерен белергә өндәү генә ул. Беҙҙең менталитет өсөн бер проблема бар шулай ҙа: баҡсаға бурҙар төшә, тәҙрәне ватып инеп, ҡыйратып сығып китәләр. Былтыр күршемдең умарталарына тиклем урланылар. Кем икәндәрен дә беләм, саҡырып, һыйлап та ҡараным шуларҙы, аптырағас. Юҡ, барыбер ҡуймайҙар, әй...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘКИӘТ ЯРАТҠАНДА...

## өмөт бар



Өс йәшлек әкиәт оҫтаһы Рамаҙан Ҡотлобаев Гран-при яуланы.

**Өфөнөң башҡорт телле балалары республиканың башҡа ҡалаларында йәшәүсе балаларға ҡарағанда отошлораҡ хәлдәлер, моғайын, сөнки һуңғы йылдарҙа уларға башҡортса аралашырға, танышырға, дуҫлашырға мөмкинлек биреүсе бик матур саралар ойошторола килә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән олимпиадалар, башҡортса дискотека, "Шаяниум"дар... Былар, әлбиттә, туған телен һанлаған үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн ойошторолған саралар. Ә бына "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсы үҙ ҡанаты аҫтына телдәре яңы асыла башлаған ике-өс йәшлек кескәйҙәрҙән алып өлкән класс уҡыусыларына тиклем бергә туплаусы, уларҙы башҡорт телмәре байрамына йәлеп итеүсе сара. Уның аҙ ғына ваҡыт эсендә лә балалар һәм баш ҡалабыҙ йәмәғәтселеге алдында үҙен танытып өлгөрөүенә, йылдан-йыл абруй яулай барыуына "Афарин!" тимәксе инек бөгөн.**

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




# МУНСАҒА САҠЫРЫУ...

**Был хаҡта миңә Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры Луиза Дәүләтшина йәүкә телефон аша еткерҙе.**

Ул бер мәл баҡсаһындағы йорттоң тупһаһында ултырған саҡта Италиялағы туристик агентлыҡта эшләп йөрөүсе яҡташыбыҙ Тәнзилә Кейекбаева шылтыратып:

-Эх, Луиза апаҡайым, ожмахтың үҙе икән ул Италия тигәндәре. Мин әле Милан ҡалаһындағы отелдең балконынан хозур донъяға һоҡланып ҡарап торам. Башымда - сомбреро, ҡулымда ошо ерҙә үҫкән емештәрҙән әле генә һығып алған һутлы фужер. Бар донъя зәп-зәңгәр бында, диңгеҙ өҫтөндә ҡояштың зөбәржәт нурҙары уйнап, күңелде рәхәтләндерә. Ҡытыҡлай. Мин йәшәгән йорт янында ғына бер бай итальяндың йәшәгән донъяһы ус төбөндәгеләй күренеп тора. Уның донъяһын күрһәгеҙ - ысынъяһау, әкиәт һарайы кеүек өс ҡатлы коттеджы күҙҙең яуын алып ултыра. Йорт янында күмгүк булып бассейны ялтырап ята. Бассейн янында әфлисун ағастары үҫә, һап-һары әфлисундары: "Беҙ күптән өлгөрҙөк бит инде, бештек, нишләп беҙҙе өҙөп алмайһығыҙ?" - тип әйткәндәй, гүйә. Ағастар янында хужаның балалары йүгереп уйнай, улар әфлисундарҙың үҙҙәренә өндәшкәнен ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә. Эх, апаҡайым, һине ошонда алып килеп, һыңар күҙең менән булһа ла ошо ожмахты бер генә минутҡа күрһәтергә ине. Беҙ үҙебеҙҙең илдә ҡол булып йәшәйбеҙ, ысын тормоштоң ни икәнен дә белмәйбеҙ. Беҙҙең илдең президенты ла ундай әкиәт һарайында йәшәмәйҙер әле, валлаһи. Әгәр ҙә ошонда килмәгән булһам, ысын рәхәтлектең, ожмахтың ни икәнен дә белмәгән булыр инем, - тип бер тынала үҙе йәшәгән донъяны маҡтап ташлаған Тәнзилә. - Ә унда, Башҡортостанда, Баймаҡта ни хәлдәр бар? - тип һорап ҡуйған ул тупһала ултырыусының нилектәндер оҙон итеп яһаған паузаһын тултырып.

-Нисек булһын, һәйбәт, мына Ғүмәр еҙнәң менән икәүләп күк Ирәндеккә ҡарап, донъяға һоҡланып, йортобоҙ тупһаһында ултырабыҙ әле. Бөгөн картуф ҡаҙып алдыҡ, йәй буйы кәләрәжүк ҡаңғыртҡайны, барыбер беҙҙең картуф емерелеп уңды. Әле бына ҡутараһынан бер биҙрә итеп картуф бешерҙек тә, өҫтөнә һары май, йәшел һуған турап һалып, шуны ашарға йыйынабыҙ. Төштән һуң Ирәндеккә менеп, сейә йыйырға уйлайбыҙ. Ҡайтышлай, Талҡаҫта һыу инеп алырға ниәтләйбеҙ. Еҙнәң мунса ла яҡҡан, май миндеге лә бар, ҡайт, әйҙә, унда юҡ ерҙә ыҙалап йөрөмә, - тигән Луиза Ҡаһарман ҡыҙы бер ни булмағандай, бер ни ишетмәгәндәй.

Тәнзиләгә шул ғына кәрәк булған да. Ул артабан һүҙен шулай дауам иткән. Луиза ханым уны туҡтатырға теләмәгән, теләһә лә, хәленән килмәҫ ине, моғайын:

-Эх, Луиза апаҡайым, Башҡортостанымды, Баймағымды үлеп һағындым, һарғайып бөттөм инде. Ана шул эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, сараһыҙлыҡ арҡаһында сығып киттем инде бында. Былай булһа, ике аяғымдың береһен баҫмаҫ инем. Бында бар нәмә түләүле: диңгеҙҙә һыу инәм тиһәң - түләйһең, балыҡ тотам тиһәң - түләйһең, тауҙарға менеп, тәбиғәткә сығып иркенләп йөрөү ҡайҙа, бер аяғыңды баҫыуың була "Привато!" тип килеп етәләр һәм ҡыуып ебәрәләр. Бөтә кешенең ауыҙында тик бер генә һүҙ: доллар, доллар, доллар. Диңгеҙҙәге балыҡтар ҙа ошо һүҙҙе ҡабатлай төҫлө. Уф, Талҡаҫыбыҙҙы, уф, яңы бешкән картуфты, уф, мунсаны һағындым...

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Баҡса мәле башланды. Баҡса ғаиләлә туйындырыр бер сарамы, әллә күңел һыйыныр урынмы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Руслан ЯУГИЛДИН, Өфө районының "Авиатор" баҡсасылыҡ йәмғиәте ағзаһы:*** Шуныһы һәйбәт: баҡсабыҙ бик уңайлы ерҙә, аэропорттан алыҫ түгел, транспорт йөрөп тора. Тик әлегә унда йортобоҙ юҡ. Атайым менән әсәйем был ер участкаһын беҙгә бүләк иткәйне, арыраҡ, теге оста, уларҙың үҙҙәренең дачаһы бар. Беҙҙең дә бәләкәй генә булһа ла баҡса өйө һалырға теләк бар, сөнки аэропортта эшләгәс, миңә йәй мәлендә баҡсанан эшкә йөрөүе яйлыраҡ булыр ине. Өфөнөң Орджоникидзе районында йәшәйбеҙ, ҡатыным уҡытыусы. Ул шәмбе көндәре лә эшләгәс, баҡсала тир түгергә йәкшәмбе генә ҡала. Балалар менән уның йәйге каникулдары минең отпускыға тап килһә, диңгеҙгә юллаunion
ныуҙы хуп күрәбеҙ. Шуға күрә әлегә баҡса ерендә картуф ҡына үҫтерәбеҙ, сөнки уға артыҡ тәрбиә, ураған һайын һыу һибеү кәрәкмәй. Былтыр һәм элекке йылдары ҡолороҡ булыуға ҡарамай, баҡсабыҙ яҡшы ғына уңыш бирҙе, сөнки, халыҡ әйтмешләй, "алтын хаҡына" бер йөк тиреҫ һатып алып, ерҙе мул ғына ашлағайныҡ. Ғаилә менән күмәкләп барып утаныҡ, күмдек, ҡуңыҙ сүпләнек. Бөтөн тәрбиә шул булды, уның ҡарауы, ял итергә лә ваҡытыбыҙ ҡалды. Әйткәндәй, биш-алты тоҡ картуф беҙгә ҡыш буйына етә, вағырағын хатта орлоҡҡа ла ҡалдырабыҙ. Ә инде йәшелсә-емеш атайымдар баҡсаһында ла күп, балалар йәй буйы һыйлана. Атай менән әсәй хаҡлы ялда булғас, баҡса - уларҙың төп эш урыны хәҙер. Улар иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем баҡсала: иренмәйҙәр ҙә, арымайҙар ҙа - рәхәтләнеп ошонда йәшәйҙәр, үҙҙәрен генә түгел, беҙҙе лә йәшелсә-емеш менән тулыһынса тәьмин итәләр. Ошо хеҙмәттән ләззәт ала улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**

• Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Майҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ Гүзәл Ситдиҡованың **"Күсле ил - көслө ил"**, 10 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның **"Көҙгө ысыҡ"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.



• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **240 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙҙәре килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм тыл хеҙмәтсәндәрен Еңеү байрамы менән ҡотланы. Өфөнөң Конгресс-холында иҫтәлекле датаға арналған тантаналы сара үтте. Бөгөн Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан 6 274 кеше, 58 меңгә яҡын тыл хеҙмәтсәне, һуғышта ҡатнашыусыларҙың 27 меңдән ашыу тол ҡатыны йәшәй. Иҫән ветерандар араһында - 37 Социалистик Хеҙмәт Геройы һәм 9 Хеҙмәт Даны орденының тулы кавалеры. Фронтҡа ебәрелгән 700 мең яҡташыбыҙҙың 322 меңдән ашыуы һуғыштан әйләнеп ҡайтмаған.Тантаналы сарала ҡатнашыусылар батырҙарҙы бер минут тын тороп иҫкә алды.

✓"Беҙҙең ветерандар уңайлы шарттарҙа йәшәһен өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ. Һуңғы өс йыл эсендә 7 меңдән ашыу ветеран һәм уларҙың тол ҡатындары торлаҡ шарттарын яҡшыртты. Быйыл йәнә 1300 кеше торлаҡ менән тәьмин ителәсәк", - тине Башҡортостан Президенты Еңеүгә 68 йыл тулыу айҡанлы ойошторолған тантаналы сарала сығыш яһап.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Салауат ҡалаһына эш сәфәре барышында акрил кислотаһы етештереү буйынса комплекс төҙөү проекты менән танышты, яңы производство өсөн әҙерләнгән майҙансыҡты ҡараны. 2015 йылда "Газпром нефтехим Салават" асыҡ акционерҙар йәмғиәте акрил кислотаһы һәм бутилакрилат комплексын файҙаланыуға тапшырырға планлаштыра. Ләкин урындағы халыҡты Салауат ҡалаһының экологик торошо борсой, улар был производствоның төҙөлөүенә ҡаршы.

✓20 майҙа Күгәрсен районында II "Ислам. Йәштәр. Киләсәк" республика форумы асыла. Сараны ойоштороусылар булып БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт-конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса советы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты, БР мосолмандары Диниә назараты һәм Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй ислам университеты сығыш яһай. Слетта Башҡортостандың ҡала һәм райондарынан мосолман йәштәре, төбәктең юғары һәм урта дини уҡыу йорттары студенттары, дин эшмәкәрҙәре һәм киң мәғлүмт саралары вәкилдәре ҡатнашасаҡ.

✓ *- Кеше ҡайһы бүрене ашата, шуныһы һәр ваҡыт еңеп сыға һәм кешенең асылына, булмышына шул бүренең сифаты күсә, - тип яуап биргән уға ҡартатаһы.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘ УҪАЛЛЫҠ ЮҠ...

**Әлбиттә, Салауаттың ирektәге туғандарына яҙған хаты менән Әхмәтзәки Вәлидиҙең киң билдәле "Башҡорт халҡына яҙған хушлашыу хаты" икеһе ике төрлө тарихи осорҙа ижад ителгән. Салауат хатын тотҡон халәтендә, ә Вәлиди үҙ иленән китергә мәжбүр ителеүсе ирекле кеше булараҡ яҙған. Әммә ике хатта ла ҡыйралыштың, еңелеүҙең ваҡытлыса ғына икәнлеге әйтелеп, алдағы ғүмер, халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә әҙерләнеү зарурлығы билдәләнә, киләсәккә ҡараш һирпелә. Икеһе лә хаттарын тыуған еребеҙҙән мәңгелеккә хушлашып китер саҡта яҙа. Ике хат авторы ла был яҙыуҙары менән халҡыбыҙ күңелендә өмөт усаҡтарын тоҡандырып китеүҙе маҡсат итеп ҡуя.**

Салауат үҙ хатында "Был хатта яҙылғандарҙы (үтәргә) тырышығыҙ, һәм беҙҙән һуң ҡалып йәшәгәндә йорттарығыҙҙа тороғоҙ һәм мөлкәт йыйнағыҙ", тип әйтһә, Әхмәтзәки Вәлиди "...йәштәрҙең уҡыуы, уларҙан ғилем һәм техника белгестәрен әҙерләү менән шөғөлләнеү, хосуси хужалыҡ эштәренән айырылып, кооперативтарға инеп, социализм аппаратында нығынып, милләткә шул юлда хеҙмәт итеүҙе вазифа итеп үҙ өҫтәренә алыу теләгене эшлекле кешеләр күңеләнә һеңдереү" зарурлығы хаҡында белдерә.

Салауат батырыбыҙ шәхесен кәмһетергә, уны ҡанһыҙлыҡта, мәрхәмәтһеҙлектә ғәйепләргә теләүселәрҙе инҡар итеү өсөн был документтар кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр булырлыҡ. Салауаттың шул уҡ ирektәге туғандарына яҙған хатындағы ошо юлдарға кире әйләнеп ҡайтайыҡ: "...Ә бер рус менән бер сыуаш кешеһе аҫылһа, уларҙы атаман Белобородовтан (шундай) указ бар, тип, Ибрәш Галин тотоп алып килеп аҫты. Был ысынлап та дөрөҫ. Әйберҙәрен һәм бурыл атын алып, шуның менән йөрөнө, үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит..."

Был юлдарҙа беҙ Салауатты, ниндәй халыҡ вәкиле булыуына ҡарамайынса, һәр кешенең ғүмере өсөн яуаплылыҡ тойған гуманист итеп тә беләбеҙ. Быны беҙ батырҙың аҡланыуы итеп ҡабул итә алмайбыҙ, сөнки былар "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ" тигән кешенең йөрәк һүҙе. Икенсенән, бында тағы ла ниндәйҙер Ибрәш Галин тигән исем һәм бурыл ат телгә алына. Тарихсылар өсөн был тағы бер бурыс: кем булған һуң ул Ибрәш Галин? Әгәр ҙә ул Салауаттың рухташы, дуҫы булһа, хатта телгә алыныр инеме икән? Яҙмаларҙан шул да асыҡлана төшә: Пугачев яуы осоронда ҡайһы урында кемдең ғүмере ҡыйылһа, ниндәй йорт яндырылһа, былар барыһы ла яу башлығы булған Салауатҡа һәм уның көрәштәштәренә япһарыла. Былар "Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан" тигән хәҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Күңелендә уҫаллығы булмаған кешенең ғәмәл-ҡылыҡтарына һис тә оҡшамаған был.

Беҙ бығаса 1773-1775 йылдарҙағы тарихта Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы тип аталған күтәрелеште баш күтәреүселәр менән батша ғәскәрҙәре араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡ тип өйрәндек һәм был ваҡиғаларҙың тышҡы яғына ғына күберәк иғтибар иттек, буғай. Һәр хәлдә, тарихсылар Крәҫтиәндәр һуғышын тап ошо аспектта ғына өйрәнде. Миңә ҡалһа, баш күтәреүселәр сафындағы эске конфликт тағы ла көсләрәк булған бит. Тимәк, 1773-1775 йылдарҙағы күтәрелештә тик бер генә һуғыш булмаған, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың ил эсендә тағы ла бер нисәүһе булған. Быының иҫбатламаһы: Пугачев, Салауат һәм уларҙың күп кенә көрәштәштәре эске дошмандар тарафынан батша ғәскәрҙәренә тотоп бирелгән. Алдағы йылдарҙа тарихсылар был ваҡиғаларға асыҡлыҡ индерер тигән уйҙамын. Тарих фәне хәҡиҡәткә тоғро булған осраҡта ғына тарих киләсәккә хеҙмәт итә ала.



Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

Бер мәл ейәне ҡартатаһынан яуызлыҡ менән изгелектең кеше күңелендә нисек барлыҡҡа килеүе хаҡында һорағас, ҡартатаһы уға түбәндәгесә итеп яуап биргән:

- Һәр бер кешенең эсендә ике бүренең өҙгөләшеүенә оҡшаған һуғыш, алыш бара. Бер бүрегә кенәселлек, көнләшеү, меҫкенлек, башҡаларҙы күрә алмау, тик үҙеңде генә яратыу, ялғанлыҡ сифаттары хас булһа, икенсе бүрене ҡылыҡһырлаған сифаттар: тыныслыҡ, мөхәббәт, өмөт, ышаныс, хәҡиҡәт, ихласлыҡ, изгелек һәм тоғролоҡ...

- Ә ҡайһы бүре еңеп сыға һуң был алышта? - тип артабан һораған ҡартатаһының һүҙҙәрен күңеленә үтә яҡын алып, ныҡ тулҡынланыу тойғоһо кисергән ейәне.

- Кеше ҡайһы бүрене ашата, шуныһы һәр ваҡыт еңеп сыға һәм кешенең асылына, булмышына шул бүренең сифаты күсә, - тип яуап биргән уға ҡартатаһы.

Ейән менән ҡартатайҙың был ҡыҫҡа ғына әңгәмәһендә уҫаллыҡтың, яуызлыҡтың, йыртҡыслыҡтың барлыҡҡа килеү механизмы бәйән ителә. Әңгәмә ҡыҫҡа ғына, әммә шул тиклем тәрән йөкмәткеле. Бында үҙҙәрендә яуыз бүрене ашатып, үҙҙәре лә яуызға әүерелгән кешеләрҙең, ҡәүемдәрҙең, империяларҙың барлыҡҡа килеү һәм юҡҡа сығыу механизмы ла берҙәй үк аңлатып бирелә. Нимә генә тимә, "Йыртҡыстың ғүмере ҡыҫҡа була" тип әйтелә икенсе бер халҡыбыҙ мәҡәлендә. Яуыз булыуҙы ғына ла түгел, күңелебеҙҙәге уҫаллыҡты инҡар иткән Салауат батырыбыҙ.

Ошо урында ҡыҙыҡ ҡына һорау килеп тыуа: уҫаллыҡ менән яуызлыҡ араһында ниндәй айырма бар икән һуң? Кем нисек аңлата ала? Ҡапылғарай, улар икеһе лә оҡшаш һымаҡ, бер үк йөкмәткеле кеүек. Әммә бөтә уҫалдар ҙа яуыз булмауы бар бит әле. Уҫаллыҡ - ул сифат, асыл түгел, ә кешенең ситуацияға ҡарап үҙен тотошо, халәте. Уҫал кешенең йөҙөндәге йылмайыуы ихлас булыуы ла бар, ә бына яуыздың йылмайыуы - битлек.

Был хаҡта сикһеҙ рәүештә фекер йөрөтөргә мөмкин булыр ине. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың ҡанлы һәм данлы тарихына боролоп ҡараһаҡ, унда беҙгә үҙебеҙҙәге яуыз йыртҡыс бүрене ашатырға һәм үҙебеҙ ҙә шундай бүрегә әүерелергә шарттар һәм сәбәптәр бихисап булған. Әммә халҡыбыҙ тарихтың был ҡаты һынауын оло сабырлыҡ менән үтеп, үҙ күңелендә яуызлыҡ үрсеүенә юл ҡуймаған. Тарихыбыҙҙың ниндәй генә осорон алып ҡараһаҡ та, бының миҫалдары бихисап. Һүҙемдә 1918 йылдың 1 июнендә Силәбе ҡалаһында яҙылған "Башҡорт хөкүмәтенең халыҡҡа мөрәжәғәте"нән бер өҙөк менән тамамлайым:

"Беҙҙе, йәки Башҡорт хөкүмәтен, төрлө кәмһетеүҙәргә дусар итеп, ҡулға алып ултыртып ҡуйҙы һәм беҙ төҙөгән учреждениеларҙы ҡыуып таратты. Төрлө кантондарҙа башҡорт халҡы мәнфәғәттәрен һәм кантондарҙа законлылыҡты һәм тәртипте нығытыу өсөн ебәрелгән беҙҙең ғәскәрҙәр алдыҡ юл менән таратып ебәрелде, юҡ ителде. Ғәскәребеҙҙең етәкселәрен, туғандарыбыҙ Абдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазовты һәм улар менән бергә тағы ун алты кешене үҙҙәренең ҡорбандары итте һәм тотоп атты. Башҡортҡа хас булған ҡыйыулыҡ, ғәйрәт, энергия, намыҫлылыҡ, ихласлылыҡ көүҙәләнеше булған ҡәҙерле, беҙ яратҡан юрист Абдулла Иҙелбаевты вәхшиҙәрсә үлтереп, һуңғы тын алышына тиклем: "Һеҙ кеше иҙеүселәр, Башҡортостан автономияһын бөтөрә алмаясаҡһығыҙ, беҙ үлербеҙ, әммә халыҡты үлтерергә һеҙҙең хәлегеҙҙән килмәйәсәк", - тигән өсөн генә лә уның мәйетенән көлдөләр, мәсхәрәләнеләр һәм ошонда уҡ - инрәп, һыҡтап торған халыҡ алдында: "Бына һеҙгә автономия", - тип ҡысҡырындылар. Февраль айында уҡ булған был ваҡиғалар большевиктарҙың кем икәнен асыҡ күрһәтте..."

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 18-се һанда.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Юғары хоккей лигаһының аҙаҡҡы матчы финалында Нефтекама хоккейсылары Ҡаҙағстандың "Сарыарка" клубын 3:0 иҫәбе менән еңде. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Торос" хоккей клубы спортсыларына һәм тренерҙарына телеграмма ебәрҙе, унда хоккейсыларҙы Братина кубогын яулауҙары менән ҡотланы. "Үҙҙәренең матур уйыны менән "Торос" уйынсылары республиканың барлыҡ хоккей яратыусыларына ҙур ҡыуаныс килтерҙе. Нигеҙҙә Башҡортостан хоккей мәктәбендә шөғөлләнеүселәр уйнаған состав менән икенсе тапҡыр Братина кубогын яулауығыҙ бик мөһим. Клубтың һәм тотош лиганың генераль бағыусыһы - "Урал" хәйриә фондының еңеүгә ҙур өлөш индереүен билдәләп үтке килә", - тиелә республика Президентының ҡотлау телеграммаһында.

✓19 майҙа "Ҡашҡаҙан" стритбол үҙәгендә урам баскетболы буйынса Өфө Кубогы үтә. Әлеге миҙгелдең тәүге турниры, йола буйынса, спорт яратыусыларҙы, шулай уҡ Мәктәп баскетбол лигаһы һәм Студенттар баскетболы ассоциацияһы чемпионаттарында сығыш яһаған егет һәм ҡыҙҙарҙы йыясаҡ. Кубок түбәндәге ике категория буйынса үткәрелә: 14-17 йәштәрҙәге һәм 18 йәштән олораҡ егеттәр һәм ҡыҙҙар. Турнирҙа ҡатнашыу өсөн дүрт кешенән торған команда йыйып, уға исем уйлап, ufabasket.ru сайтында теркәлергә кәрәк. Турнир Рәсәй Кубогының төбәк этабы булып тора. Шулай итеп, ир-егеттәр категорияһында еңеү яулаған команда Рәсәй Кубогы финалында ҡатнашыу хоҡуғы аласаҡ.

✓16 һәм 17 майҙа Яңауыл ҡалаһында Фәтих Ихсанов призына "Моңға бай гармун байрамы-2013" исемле сара үтә. Матур йолаға әүерелгән был байрам быйыл етенсе тапҡыр үткәрелә. Бәйге ике йәш категорияһы буйынса үткәрелә: 16 йәшкә тиклемге һәм 17 йәштән олораҡ гармунсылар. Һәр ҡатнашыусы ике көй уйнап ишеттерергә тейеш. Жюри составына Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының танылған мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәре инә. Гран-при яулаусыға быйыл 30 мең һум аҡса тапшырыласаҡ. 17 майҙа Яңауылдың мәҙәниәт һәм ял паркында гармунға һәйкәл асыу планлаштырыла.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Депутаттар "Өфө ҡалаһының статусы - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы тураһында" закон проектын һәм уны БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға ҡарауға тәҡдим итеү тураһындағы тәҡдимде бер тауыштан хупланы.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАБАТЛАҒАНДАН...

## доға иҫкермәй

**Өфө тиһәң, иң элек Ағиҙел яры буйындағы мөһәбәт Салауат һәйкәле күҙ алдына баҫа. Артабан инде кемдер Аҡ йортто, бәғзеләр театрҙарҙы, юғары уҡыу йорттарын берәм-берәм күҙҙән үткәреп, хәтерендә барлай башлай. Шулай уҡ Өфө - ул Башҡортостан Республикаһы Президенты, юғары дәүләт власы, башҡарма власть органдары, дипломатик вәкиллектәр, сит ил дәүләттәре учреждениелары урынлашҡан урын да. Тағы ул республиканың айырым категорияһына ҡараған халыҡ йәшәгән административ-территориаль берәмек, уны тарихи яҡтан ҡарағанда ла, бөгөн дә республиканың сәйәси, иҡтисади, мәҙәни һәм фәнни үҙәге тип әйтергә була.**

Башҡортостан Конституцияһының 65-се статьяһында Өфөнөң статусы "Өфө - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы. Баш ҡала статусы Башҡортостан Республикаһы законы менән билдәләнә" тип нығытылған. Шулай уҡ ошо статус 1996 йылдың 14 мартында ҡабул ителгән БР Законында ла теркәлгән. Әммә был хоҡуҡи акт бөгөн үҙенең актуаллеген юғалтҡан. Ошоно иҫәпкә алып, ҡала округы Советы депутаттары корпусы баш ҡаланың статусын билдәләүсе яңы закон проекты әҙерләгән. Был эште башҡарғанда депутаттар, мәҫәлән, Силәбе өлкәһе, Свердловск өлкәһе ҡабул иткән закон положениеларына таяна. Шулай уҡ проектта баш ҡала статусын билдәләгәндә Силәбе, Екатеринбург ҡалаларының тәжрибәһен иҫәпкә алып, "баш ҡала функциялары" тигән билдәләмәне индереү тәҡдим ителә. Сөнки баш ҡала территорияһы ҡала округы хакимиәте территорияһы менән тап килә һәм барлыҡ кимәлдәге власть органдары функцияларын башҡарыу шулай уҡ баш ҡала бюджетына йөкмәтелә. Тимәк, Өфө Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль берәмеге генә түгел, ә бер үк ваҡытта баш ҡала ла булғас, ул транспорт, ҡаланың торлаҡ-коммуналь системаһы буйынса үҙенә ҙур йөкләмә, көсөргәнеш ала. Шулай уҡ ул тотош республика өсөн кадрҙар әҙерләүҙә лә, мәҙәни мираҫ объекттарын популярлаштырыуҙа ла, республиканың йәшәү һәм эшләү мөхитен булдырыуҙа ла яуаплылыҡ тоя. Ябайлаштырып әйткәндә, урындағы үҙидара органы тарафынан баш ҡала функцияларын үтәү төбәк бюджетынан өҫтәмә финанслауҙы талап итә. Шуға күрә закон проектында сығымдарҙы компенсациялау механизмдары күрһәтелә.

Башҡортостан Республикаһының 1996 йылдың 14 мартындағы законының 7-се статьяһында республика бюджетынан баш ҡалаға сығымдарҙы ҡаплау маҡсатында субвенциялар бүлеүҙе ҡараһа ла, был сығымдар ни сәбәплелер республика бюджетында сағылыш тапмай. Проект тап ошо етешһеҙлекте бөтөрөүҙе, бушлыҡты тултырыуҙы күҙаллай ҙа инде. Депутаттар "Өфө ҡалаһының статусы - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы тураһында" закон проектын һәм уны БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға ҡарауға тәҡдим итеү тураһындағы тәҡдимде бер тауыштан хупланы. Ул республика парламентарийҙары тарафынан хуплау тапһа, Өфөнөң Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ функцияларын башҡарыуы яңы кимәлгә күтәреләсәк.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК...*

# ҺӘР КӨНӨҢӘ...

## маҡсат ҡуй!

**Колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, "Артабан ни эшләргә?" тигән һорау беҙҙең алға ла килеп баҫты. Уйлана торғас, әмәлен тапҡандай булдыҡ.**

Ата-бабаларҙан ҡалған кәсепте бәләкәйҙән күреп үҫтек инде беҙ. Мәҫәлән, бейәбеҙ ҡолонлаһа, ҡолондан артҡанын һауып, ҡымыҙ бешеп эсә торғайныҡ. Ошо шөғөлдө ойоштороп, йәнләндереп ебәреп булмаҫмы икән, тигән һорау тыуҙы миндә бер мәл. Дөрөҫ, иң башта магазин асып ебәрҙек. Магазиныбыҙ минең күптәнге ошо хыялымды тормошҡа ашырырға ярҙам итте: ер һәм бер-нисә йәш бейә малы һатып алдыҡ. Бейәләр һаны яйлап артты, ҡымыҙыбыҙ ҙа тирә-яҡта таралыу яулай башланы. Ҡулға төшкән аҡсаны кәсепте үҫтереүгә һала торҙоҡ. Ферма бинаһы, ҡымыҙ ташыу өсөн "Газель" автомобиле, бесән сабыу өсөн ике яңы МТЗ-80 тракторы һәм башҡа махсус техника һатып алдыҡ. Бар эштәрҙе ғаиләбеҙ менән күмәкләп башҡарҙыҡ. Шундай берҙәмлек булмаһа, был эште атҡарып сығыу бик ауыр булыр ине.

Бөгөнгө көндә хужалығыбыҙҙа 35 баш һауын бейәһе, йөҙләп ат бар, тәүлегенә 120 литр ҡымыҙ етештереү мөмкинлегенә эйәбеҙ. Дүрт һауынсы, ике көтөүсе яллағанбыҙ. Ер эшкәртеү эшен минең бер туған ҡустым Рим алып бара. Улым Башҡорт дәүләт аграр университетында белем ала, буш ваҡытында беҙгә ярҙамлашырға ла өлгөрә.

Ҡымыҙ - бик үтемле тауар ул. Дәүләкән, Шишмә районларын, шулай уҡ Өфө ҡалаһы магазиндарын халҡыбыҙ өсөн традицион булған ризыҡ менән тәьмин итәбеҙ. Беҙҙең ҡымыҙҙы бик тәмле, тиҙәр, маҡтап һатып алалар, һораусылар күп. Ҡымыҙ етештереүҙе май айында башлайбыҙ, сентябрь аҙаҡтарына тиклем ныҡлап эшләп ҡалабыҙ. Ә көҙгә табан аттарҙы һимертеп, һуйып, ҡаҙылыҡ, ит етештереүгә күсәбеҙ. Һәр миҙгелдең үҙенә күрә мәшәҡәте һәм ҡимməте бар. Әйткәндәй, ҡаҙылыҡ һатыу менән ҡатыным шөғөлләнә.

Беҙҙең уңыштарҙы күреп, уңыш сере нимәлә, тип һорағандары бар. Сит кешегә түгел, үҙебеҙгә эшләйбеҙ бит - бөтә сер ошондалыр, тим. Иң мөһиме, ялҡауланмаҫҡа, иртүк торорға, кискә тиклем эшләргә кәрәк. Мин, мәҫәлән, Өфө юлдарын йыш тапайым, шуға таңғы 5-тән дә ҡалмай йоҡонан торабыҙ. "Иртән торһаң, ит бешә, һуң торһаң, бит бешә" тип юҡҡа ғына әйтмәгән бит халҡыбыҙ.

Бындай шөғөлгә тотонған кешенән тырышлыҡ, оҫта ойоштора белеү генә түгел, ә үткер булыу, бер ерҙә лә юғалып ҡалмау кеүек сифаттар талап ителә. Тағы, алдыңа ҡуйған маҡсаттарҙы аҙағынаса еткереп ҡуйырға кәрәк. Шунда ғына алға барып була. "Бөгөн мин ошоно эшләйәсәкмен", тип, һәр көнгә маҡсат ҡуя белергә тейеш кеше. Тағы, үткән көн менән түгел, алдағы көн менән йәшәргә кәрәк.

**Илгиз НИҒМӘТУЛЛИН,**
**эшҡыуар.**
**Дәүләкән районы**
**Яңы Яппар ауылы.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# УНЫ ҺӘР ЕРҘӘ...

## үҙҙәренеке тип йөрөтәләр



**Быйыл көҙгөһөн Өфөлә XXIII Халыҡ-ара Аксаков байрамы уҙғарыласаҡ. Беренсе тапҡыр ул 1991 йылда яҙыусының тыуыуына 200 йыл тулыуға арналып үткәрелһә, хәҙер инде ул донъя кимәленә сыҡты.**

Ҡала округы Советы депутаттары ла был байрамға ҙур иғтибар бүлә. Спикер Евгений Семивеличенконың киң мәғлүмәт саралары журналистары өсөн ошо темаға арнап матбуғат конференцияһы уҙғарыуы ла быға асыҡ миҫал. Быйыл был сараға бер аҙ үҙгәреештәр индереләсәк. Әгәр 2006 йылдан махсус урта һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн өс номинацияла (иң яҡшы ғилми-тикшеренеү өлкәһендәге эш; иң яҡшы ғәмәли характерҙағы эш; С. Т. Аксаковтың тормошона һәм ижадына, уның ғаиләһенә бәйле иң яҡшы мәғрифәтселек эше) 10-ар меңлек биш премия биреү ҡаралһа, хәҙер инде был сик бер аҙ киңәйтеләсәк. Евгений Александрович әйтеүенсә, быны үҙ сәбәптәре лә бар, сөнки конкурста студенттар ғына түгел, хатта лицей, колледж, гимназия, мәктәп уҡыусылары ла ҡатнашып, матур ижад өлгөләре тәҡдим итә икән. Әгәр элегерәк эштәр әҙәби йүнәлештә булһа, һуңғы йылдарҙа ысынлап та ғилми нигеҙҙә башҡарылғандары күберәк, тип билдәләй комиссия ағзалары.

Икенсе яңылыҡ иһә китап нәшер итеүгә ҡағыла. Быйыл беренсе тапҡыр С. Т. Аксаковтың тормош һәм ижад юлына, уның ғаиләһенә ҡағылышлы ғына түгел, ә ижад юлдары ниндәйҙер кимәлдә яҙыусы исеме менән бәйле кешеләр хаҡында ла буласаҡ ул. Әйтәйек, 1992 йылда булдырылған Аксаков стипендияһына лайыҡ булыусыларҙың яҙмышы артабан нисек барған, бөгөн улар ҡайҙа эшләй, ниндәй өлкәлә хеҙмәт итә һ.б. Шулай уҡ С. Аксаковтың ижадына битараф булмаған кешеләрҙән, уҡытыусыларҙан һ.б. бөгөн китапҡа индереү өсөн ҡыҙыҡлы материалдар көтә ҡала Советы депутаттары. Әлегә был баҫманың күләме лә, тиражы ла билдәле түгел. Бары тик материалдар йыйыу этабы ғына бара. Материалдар тупланған ваҡытта уны ҡайҙа нәшер итеү мәсьәләһе хәл ителәсәк. Ҡала округы хакимиәтенең һәм ҡала Советының бюджетынан сығып фекер йөрөткәндә, нәшриәт "осһоҙло ла, зауыҡлы ла, сифатлы ла" хеҙмәт күрһәтергә тейеш. Шуның өсөн республиканың ғына түгел, башҡа өлкәләрҙәге нәшриәттәр менән хеҙмәттәшлек тә инҡар ителмәй.

Хәйер, бер нисә көнгә һуҙылған Аксаков байрамы үҙе лә хәҙер баш ҡала сиктәренән сығып, республиканың район-ҡалаларында, хатта Ырымбур һәм Һамар өлкәләрендә лә киң билдәләнә. Уны һәр ерҙә "беҙҙеке" тип ҡабул итәләр. 1996 йылда Президент Указы менән булдырылған Сергей Аксаков исемендәге әҙәби премияға бәйле был байрамды Рәсәйҙә генә түгел, хатта сит илдә лә яҡшы беләләр. Ә әлегә әҙерлек эштәре бара һәм ҡала советы депутаттары төп саралар планын майҙа раҫлаясаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан Президенты Өфөнөң Чудинов һәм Блюхер урамдарында йәшәгән кешеләр менән осрашҡандан, объект төҙөләсәк урындарҙа булғандан һуң, Рихард Зорге, Блюхер һәм Трамвай урамдарында тиҙ йөрөшлө трамвай линияһын төҙөүҙе кисектереп торорға тигән ҡарар ҡабул итте. Төҙөлөш проектын өфөләләр тәнҡиткә алды, халыҡ трамвай линияһының йорттарға һәм балалар баҡсаһына яҡын урынлашасағына, быны өсөн бихисап ағастарҙы ҡырҡыу кәрәклегенә борсолоуын белдерҙе. Төбәк башлығы билдәләүенсә, граждандарҙы йәлеп итеп, был эште яңынан башларға кәрәк. Бер йылдан аңлайышлы, ышаныслы, халыҡ менән килешелгән вариант булырға тейеш.

✓ **12 майҙа Миәкә районы Нарыҫтау эргәһендәге Сәхәбәләр мәсетендә рәжәб айы башланыу айҡанлы Мәүлит байрамы үткәрелә. Башлана сәғәт 12-лә.**

✓ Еңеү көнө айҡанлы баш ҡалала мәҙәни, социаль һәм спорт саралары үтте. Байрам тантаналары Еңеү паркындағы мәңгелек утҡа сәскә һалыу менән башланды һәм ҡаланың бөтә парктарында, мәҙәниәт йорттарында, майҙандарында дауам итте. Ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Еңеүҙең 68 йыллығын 2413 һуғыш ветераны ҡаршы алды. Шулай уҡ Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына тиңләштерелгән тағы ла 20 мең кеше бар. Ҡала етәкселеге бер ветеранды ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа тырышты, байрам айҡанлы ҡотлау хаттары, бүләктәр тапшырҙы.

✓ 17 майҙа Салауат һәйкәле янында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғырҙарын һөйләү буйынса "Минең Рәми" марафоны үткәрелә. Башлана киске 18 сәғәттә. "Минең Рәми"гә ошо уҡ көндә Башҡорт дәүләт университетының Сибай, Учалы, Стәрлетамаҡ филиалдары, Бөрө дәүләт педагогия академияһы студенттары, Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе ҡалаларында йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә ҡушыласаҡ. Ҡайһылыр ҡала, район, мәктәп, китапхана шиғри марафонда ҡатнашырға теләһә, ошо адресҡа теркәлегеҙ: vk.com/ramigaripov ("Бәйләнештә" селтәрендәге "Рәми Ғарипов" төркөмө).

✓ Дәүләт транспорт ойошмалары ла байрамдан ситтә ҡалманы. Һуғыш ветерандары трамвайҙарҙа, троллейбустарҙа һәм "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһына ҡараған ҡала транспортында 9-12 май бушлай йөрөнө.

*АЛДАЙҘАР!*

# БЕҘҘЕҢ КЕШЕЛӘР...

## "тишек кәмә"гә ултырырға ярата ла һуң!

**Сергей Мавроди һәм уның финанс пирамидаһы беҙҙең илдә генә түгел, ә бар донъяға билдәле. Ябай кешеләргә еңел байыҡыу юлын тәҡдим иткән был әҙәмдең мәкерле аҡылына хайран ҡалырлыҡ. Сөнки шундай ҙур "эште" атҡарып сығыу өсөн барыһын да алдан күҙалларға, һанарға, иҫәпләргә, ә иң мөһиме - кешене ышандыра белергә кәрәк бит.**



Уның ялған ҡағыҙҙарын алыу өсөн оҙон-оҙон сиратҡа теҙелгән халыҡты күптәр хәтерләй. Ә бер көндө меңәрләгән кеше үҙенең алданғанын белеп, аҡылдан яҙыр сиккә етте. Бәғзеләр ысынлап та йән дауалау учреждениеларының пациентына әүерелде. Кемдер иҫ киткес байлыҡ урынына "тишек кәмә"гә ултырыуын аңлап, үҙ-үҙенә ҡул һалды.

Ярай, XX быуаттың был "ғәжәйеп" енәйәтсеһен яуапҡа тарттырҙылар. Ләкин алданған кешеләрҙең аҡсаһы кире ҡайтманы бит. Ә иң аяныслыһы, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер кимәлдә иң ҡыҙығы, беләһегеҙме, нимә? Сергей Мавроди, иреккә сыҡҡас, был финанс пирамидаһын яңынан төҙөй башланы. Һәм беҙҙең халыҡ үҙенең ҡара тирен түгеп тапҡан аҡсаһын тағы ла уның ҡулына алып барып тапшыра башланы. Мавроди менән хоҡуҡ органдары яңынан ҡыҙыҡһына башламаһа, эш нимә менән тамамланыр ине -билдәһеҙ.

Халҡыбыҙҙы ҡомһоҙлоҡта ғәйепләп тә булмайҙыр. Улар һәр әҙәмгә хас матур, лайыҡлы тормош алып барырға, балаларына юғары белем-тәрбиә бирергә теләй. Бының өсөн, әлбиттә, аҡса кәрәк. Түбән эш хаҡы алған кешеләрҙең тиҙ арала аҡсалы булырға теләүе аңлашыла. Әммә ни өсөн беҙ һәр саҡ бер үк хатабыҙҙы ҡабатлайбыҙ, бер үк тырмаға килтерәбеҙ ҙә баҫабыҙ икән?

Мавродиҙың хәйләһен отоп, аҡса эшләүселәр күп хәҙер. Улар төрлө алдыҡ һүҙҙәр менән албырғатып, кешеләрҙе талай. Әле бына Темәс ауылында яңыраҡ булған хәл дә көнделе әрнетте. Бында ла кешеләр үҙ ҡулы менән 32 мең һум аҡсаһын финанс пирамидаһына алып барып тапшырған. Шулай итеп, Баймаҡ эске эштәр бүлеге начальнигы урынбаҫары Ф.Ә. Моратов әйтеүенсә, Темәс һәм уға яҡын урынлашҡан ауылдарҙа 56 кеше алданған. Уларҙың күпселеге бюджет өлкәһендә эшләгән хеҙмәткәрҙәр. "Күпме генә халыҡты иҫкәртһәк тә, улар, ниңәлер, барыбер ошондай аферистарға ышана. Был пирамида Магнитогорск ҡалаһы яғынан килә. Уның осона сығып етеүе мөмкин түгел. Әлбиттә, пирамидала беҙҙең райондан 56 кеше генә булмаған. Аҡса алып өлгөргәндәре өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә" , - тине Ф.Ә. Моратов.

Эйе, иң үкенеслеһе, ғәйеплеләрҙең ғәйебен иҫбат итә алмауҙа. Закон алдында уларҙың намыҫы таҙа, сөнки улар халыҡтың аҡсаһын талап та, ҡурҡытып та, урлап та алмаған. Һәр кем хәләл көс менән йыйып барған аҡсаһын уларға үҙ теләге менән алып килеп тапшырған.

Хәҙер MLM (multi-level marketing) исеме аҫтына йәшенгән фирмалар күбәйеп китте. Улар ҙа пирамида принцибы буйынса эшләй. Кешеләргә 500-3000$ күләмендәге эш хаҡы тәҡдим ителәсе. Йыш ҡына улар косметика, кейем-һалым менән кәсеп иткән фирмалар исеме аҫтында эш итә. Юғары эш хаҡы "алыу" өсөн күп тә кәрәкмәй - был "эшкә" әҙерәк аҡса һал. Бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәй генә аҡса эшләп булыуына алданған кешеләр үҙҙәренең таланыуын һиҙмәй ҙә ҡала.

Әлбиттә, пирамидаға тәүҙәрәк килеп ингән кешеләр ниндәйҙер кимәлдә аҡса алып өлгөрә. Был хаҡта ул үҙенең яҡындарына, таныштарына оло шатлыҡ менән һөйләй. Еңел юл менән байыған кешегә ҡарап башҡалар ҙа барлы-юҡлы аҡсаһын тотоп, шунда ашыға. Һөҙөмтәлә, тағы ла шул уҡ хәл - алданыу.

Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп шуны әйтке килә: еңел генә, тир түкмәй аҡса эшләргә тәҡдим итәләр икән, ышанмағыҙ. Пирамиданың башына килеп эләккәнһегеҙ икән, һеҙҙән һуң алданасаҡ туғандарығыҙ, яҡындарығыҙ, күрше-күлән хаҡында уйлағыҙ. Сөнки һәр пирамида шундай ысул менән төҙөлә, баштағылар аҡса эшләй, ә ҡалған бик күп кешеләр алдана.

Шулай итеп, интернет селтәрен ҡараһаң, юғары эш хаҡы тәҡдим иткән бер көнләк фирма-пирамидалар бик күп. Улар халыҡҡа алтын тауҙар вәғәҙә итергә лә тартынмай. Кеше менән эш итергә өйрәнгән махсус психологтар халыҡты бик оҫта алдай. Шуға күрә буш вәғәҙәләргә ышанып, балаларығыҙҙың ауыҙынан өҙөп, аҡсағыҙҙы елгә ташламағыҙ.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**
**Баймаҡ районы.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТЕРКӘЛМӘГӘНҺЕҢМЕ?

## Аҡсаңды әҙерлә!

**Рәсәй Президенты тарафынан индерелгән теркәүһеҙ йәшәгән өсөн язаны ҡәтғиләштереүҙе күҙаллаған закон проекты Дәүләт Думаһында беренсе уҡыуҙы үтте.**

Шулай итеп, закон ҡабул ителгән осраҡта ялған теркәү эшләткән граждандарҙың 100 меңдән алып 500 мең һумға тиклем штраф түләүе ихтимал. Шулай уҡ бының өсөн өс йылға тиклем мәжбүри эшләү йәки ошо уҡ срокҡа төрмәгә эләгеү мөмкинлеге лә юғары. Фатирҙа теркәүһеҙ йәшәгән өсөн 2 меңдән алып 3 меңгә тиклем штраф һалынасаҡ. Ә гражданды үҙ фатирында теркәүһеҙ йәшәткән өсөн фатир хужаларына 2 меңдән алып 5 меңгә тиклем аҡсаһын сығарып һалырға тура киләсәк.

Күптәрҙең ҙур ҡалаларға ауылдарҙан һәм башҡа бәләкәй ҡалаларҙан килеп эшләүҙәрен һәм теркәлеүһеҙ йәшәүҙәрен иҫәпкә алғанда, был закон дәүләт ҡаҙнаһын арыу ғына байытасаҡ, тип иҫәпләргә мөмкин. Ләкин теркәлеүе булмауы һөҙөмтәһендә эштән сығып, тыуған ауылына ҡайтып китергә һәм унда эшһеҙҙәр армияһын тулыландырырға мәжбүр буласаҡтарҙың, тимәк, һалым түләмәүселәрҙең бихисап буласағын күҙ алдына баҫтырғанда иһә, ҡаҙна килеме бик үк күпкә артасаҡ, тип уйлау ҙа хата булыр ине. Ғөмүмән, был закондың көсөнә инеүенән кем отор һәм кем отолор - әлегә ҡараңғы.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**Бөгөнгө көндә беренсе һәм унан һуңғы балаларға стандарт һалым ташламаһы күләме күпме тәшкил итә?**

- 2009 йылдан алып 2011 йылға тиклем стандарт һалым ташламаһы ата-әсә, уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусы, опекун йәки попечитель, аҫрауға алыусы ҡарамағындағы һәр балаға 1 мең һум тәшкил итте.

2011 йылда Рәсәй Федерацияһы Һалым кодексының 218-се статьяһында балаларға стандарт ташламаһының яңы күләме билдәләнде. Уға ярашлы, 2012 йылдың 1 ғинуарынан иһә беренсе һәм икенсе балаға һалым миҙгеленең һәр айы өсөн һалым ташламаһы күләме 1400 һум тәкшил итә. Һалым ташламаһы 18 йәше тулмаған һәр балаға түләнә. Шулай уҡ уҡыу йортонон көндөҙгө бүлегендә белем алыусы һәм аспирантурала, ординатурала, интернда уҡыусы студентҡа, курсантҡа ла (24 йәшкә тиклем) һалым ташламаһы түләү ҡаралған.

**Әгәр ҙә беренсе йәки икенсе бала ғәрип булһа, стандарт һалым ташламаһы ниндәй күләмдә билдәләнә?**

- 2011 йылдың 1 ғинуарынан 18 йәше тулмаған ғәрип балаға, шулай уҡ көндөҙгө бүлектә, аспирантура, ординатура, интернда уҡыусы I йәки II төркөм ғәрип балаға 24 йәшкә тиклем стандарт һалым ташламаһының күләме 3 мең һум итеп билдәләнгән (РФ Һалым кодексының 218-се статьяһы). Беренсе йәки икенсе бала өсөн һалым ташламаһын ғәрип балаға тәғәйенләнгән ташлама менән дөйөмләштерергә ярамай.

**Никахта тормаған, ләкин баланы ҡарарға ярҙам иткән ата-әсә һәр бала өсөн һалым ташламаһы алыуға дәғүә итә аламы?**

- Никахта тормаған, ләкин баланы ҡарауҙа ярҙам күрһәткән һәр ата-әсә, үҙенең алимент түләүен документаль иҫбат иткән осраҡта, һалым ташламаһына дәғүә итә ала. Икенсе никахта тороусы һәм беренсе никахтағы балаға алимент түләгән ата-әсә стандарт һалым ташламаһын алырға мөмкин. Ташламаны алыу өсөн уға баланың (балаларҙың) тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ күсермәһен һәм алимент түләү хаҡындағы документты күрһәтеү мотлаҡ. Түләнгән алимент Рәсәй Федерацияһы Ғаилә кодексында билдәләнгән күләмдә булырға тейеш.

**Икеләтә күләмдә стандарт һалым ташламаһын алыуға кем хоҡуҡлы?**

- Икеләтә һалым ташламаһын алыуға никахта торған ата-әсә генә хоҡуҡлы. Шулай уҡ был хоҡуҡҡа баланың атаһы йәки әсәһе үлеү сәбәпле (йәки үлгән тип иғлан ителгән осраҡта), баланы тәрбиәгә алыусылар эйә. Әгәр ҙә баланың тыуыу тураһындағы таныҡлығында атаһы күрһәтелмәһә йәки баланың атаһы юридик яҡтан билдәләнмәһә һәм уның тураһында таныҡлыҡта мәғлүмәттәр тик әсәһенең ғаризаһына ярашлы ғына яҙылһа, әсәй кеше икеләтә һалым ташламаһын алырға хоҡуҡлы.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Үлән йыйыу мәле

**Яҙ етеп, үләндәр сығып, ағастар япраҡ яра башлаған мәлдә дарыу үләндәре йыйыу кәрәклеге тураһында уйлана башлайһың. Һәр йондоҙлоҡтоң үҙенең шифалы үләне бар, бөгөн һеҙҙе шулар менән таныштырырға теләйем. Кемдер йондоҙлоҡтарға бик ышанып та етмәйҙер, шулай ҙа хәтер һандығығыҙға һалып ҡуйығыҙ. Йондоҙлоҡтарҙың исемдәрен дә үҙемсә атайым.**

**Ҡусҡарҙарға** баш, күҙ ауырыуы, аңҡау һәм ауыҙ эсенең лайлалы тышсаһы боҙолғанда һары мәтрүшкә, ҡара ҡарағат, балан, күк сәскә (синеглаз) үләндәре файҙа бирә. Үләндәрҙең сәскәһен һәм орлоғон файҙаланырға кәрәк.

**Игеҙбыҙауҙарға** миләүшә, шалфей, сирень, мәтрүшкә, ҡуҙғалаҡ, айыу балаһы, төйөнтамыр (ятрышник) үләндәренең тамырын тамаҡ, ҡан әйләнеше ауырыуҙарынан, астманан дауаланыу өсөн ҡулланыу отошло.

**Игеҙәктәргә** борсаҡ, ҡомалаҡ, сырмалсыҡ, бесәй үләне, лиана, сельдерей япрағы пневмония, туберкулез, астма, бронхит һәм нервы ауырыуҙарынан сихәт бирә, дауалай.

**Ҡыҫалаларға** итләс, һыуһыл үҫемлектәр - ҡыяр, ҡарбуҙ, ҡабаҡ, ҡауын, томбойоҡ, ыны, розмарин гастриттан, склероздан, шеш-яранан, һарыһыу ауырыуҙарынан дауа булып тора. Был үҫемлектәрҙең һабаҡтарын ғына файҙаланырға кәрәк.

**Арыҫландарға** үгәй инә япрағы, бәпембә, артыш, петрушка, укроп, тырнаҡ гөлдөң орлоҡтары йөрәк, арҡа ауырыуҙарынан, стенокардиянан һәйбәт дауа бирә.

**Ҡыҙҙарға** һоло, арыш, райхан гөлө, миндаль сөтләүеге әсәк сирҙәренән, перитонит, эс ҡатыу, әсәк сырмалыуҙан ҡотҡара. Фәҡәт тамырын файҙаланырға кәрәк.

**Үлсәүҙәргә** инжир, миләүшә, цитрустыларҙың япраҡтары диабеттан, бөйөргә таш ултырыуҙан, нефрит һәм уремиянан дауаланырға ярҙам итә.

**Саяндарға** әрем һәм райхандың һабаҡтары енес ағзаларын, геморройҙы, гепатит һәм эренле тәрән яраларҙы дауалауға ярҙам итә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Ауырға тура килһә лә, барлыҡ һалымдарҙы ла ваҡытында һәм теүәл түләп барҙым. Ләкин бынау иғәнәләрҙе арттырыу тамам күңелемде һүрелтте, эшемә аяҡ салды. Шуға күрә эшемде ябырға ҡарар иттем.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Сөннәт им-томо

Ир бала тыуғас, етенсе көнөндә сөннәткә ултырткандар. Шәриғәт буйынса, ир баланы етенсе көндән егерме бер йәшкә тиклем сөннәткә ултыртырға мөмкин. Сөннәтте махсус кеше - баба йә сөннәтсе башҡарған. Улар был белемдәрен быуындан-быуынға тапшырған. Шуға сөннәтселәр, бабалар араһы, нәҫеле булған, һәр сөннәтсенең үҙе генә белгән им-томо, әйтә торған әпсендәре, һамаҡтары булған.

**Бабаға ултыртыу.** Баба өйҙән өйгә йөрөгән. Кемдең ир балаһы бар, улар уны саҡырып индергән. Баба баланы: "Куян-ат бирәм, ҡыҙыл ыштан бирәм", - тип алдаштырып, бабаға ултыра торған була. Баба тәүҙә доға уҡый, шунан малайҙың ҡасаһын үткер бәке менән ҡырҡа, боҙолмаһын өсөн ярағa иләнгән ағас сөрөгөн йәки һалам көлөн һибә. "Шуны бөткәнсе һибеп тор", - тип ҡалғаның әсәһенә биреп китә. Ағас сөрөгө лә килешә торған ине, тип хәтерләй ололар.

**Баба ҡарт.** Элек өй беренсә Баба ҡарт йөрөгән. Сөннәткә ултыртҡанда: "Куян-ат бирәм", - ти торған була баба ҡарт. "Баба ҡарт ҡасан киләтерә ҡуян ат?" - тип бала һораһа, "Һин терелгәс, һин йөрөй башлағас", - тип яуаплағандар. Элек баба ҡартҡа хәйеренә бер бөтөн түнәрәк әпәй биргәндәр.

*Сөннәт әпсендәре*
*Илама, илама, балам,*
*Бына һиңә йәшел ыштан тегәм,*
*Бына һиңә күк ыштан тегәм,*
*Энә осо тейеп китә,*
*Ҡайсы осо тейеп китә.*
*Өф, өф, өф!*

* * *

*Илама, балам, илама,*
*Илама, улым, илама,*
*Мин һиңә яңы ыштан тегәм,*
*Уны ҡыҙылға буяйым,*
*Уға ҡыҙҙар күҙе төшһөн,*
*Йөрәктәре янып бөтһөн.*

### Йәш бала ауырыуҙарын имләү

**Ҡойондорған һыу менән им-том.** Бүсерле бала күп илай. Көн йонсоһа, бүсере сыҡһа, илай тигән булалар. Ен ҡағылһа, ен дә илата. Бала тынысһыҙ була, йоҡламай. Барыбер шул илаҡ баланы саҡ ҡына әмәлләһән, тынысланa, баҫыла. Өшкөрөп әмәлләү киң таралған була. Тоҙ өшкөртөп тә имләгәндәр. Өшкөртөлгән тоҙ һәм мәтрүшкә менән ҡойондорғандар. Ҡойондорған һыуҙы ҡыҙыл энерҙә берәйһенән ҡырға түктергәндәр.

**Йәш баланы күҙҙән имләү.** Ҡырк көнгә тиклем йәш баланы бик һаҡларға кәрәк. Унын өсөн яман заттар, яман күҙҙәр барыһы ла хәүефле. Йәш балаға күҙ тейһә, тыммай илай икән. Күҙ уғы шул тиклем көслө була, хатта бала унан үлә лә, тиҙәр. Шуға балаға ҡарап, берәйһе һоҡланһа, уны ныҡ яратып һөйһә, был балаға мотлак имсе саҡырғандар. Ул төрлө ысулдар ҡулланып, баланы күҙ уғынан ҡотҡарған.

**Эт күкрәгеn ябыу.** Ҡаты күҙ тейһә, бала күкрәктән тын ала алмай. Быңдай осракта "эт күкрәген" ябаһың. Был им-том шунан ғибәрәт: эҫе һыуға аҙ ғына ҡамыр баҫаһың да, шуны майлап, ауырыу бала күкрәгенә, йөрәк ауыҙына теймәй генә ябаһың. Ярты сәғәт тотаһың да, шуны артың менән генә эткә һалаһың.

Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.

О, ЗАМАНА!

**Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында һәр икенсе баланың хыялы эшҡыуар, бизнесмен булыуға ҡайтып ҡала ине. Ваҡыт үтте, ләкин бөгөнгө көндә лә эшҡыуарҙар рәтен тулыландырырға теләүселәр һаны кәмемәй. Был бигерәк тә бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ҡағыла. Ләкин "эшҡыуарлыҡ" тигән донъяла майлы ҡалъя һирәк эләгеүсән, күп осраҡта әҙе менән хушһынырға тура килә. Сөнки дәүләт тарафынан ҡабул ителгән ҡайһы бер закондар былай ҙа ауыр һәм ҡатмарлы эшҡыуарлыҡ өлкәһенә үҙ ҡатмарлыҡтарын өҫтәй.**

# ЭШҠЫУАРЛЫҠ...

## майлы ҡалъя түгел шул



Быйылдан башлап шәхси эшҡыуарҙарға билдәрен тағы ла нығыраҡ быуырға тура киләсәк, сөнки ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан Пенсия һәм Мотлаҡ медицина страховкаһы фондтарына түләнгән социаль иғәнәләр күләме артты. Әгәр ҙә алдағы йылдарҙа шәхси эшҡыуар был маҡсатҡа йылына 17 мең тирәһе аҡса күсерһә, быйыл иһә унын күләме 36 меңдән күберәк. Эшҡыуарлыҡ "һурпаһын" эсеп ҡарамаған кеше өсөн был сумманы түләү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай кеүек күренер, ләкин тинләп йыйылған һумдың күп өлөшө нәҡ ошо социаль иғәнәләр һәм һалымдар түләү өсөн киткәнлеген бары тик шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән кеше үҙе генә аңлай. Ысынлап та, тәү ҡарамаҡҡа, шәхси магазин тотҡан йәки тәҙәлөш менән булған эшҡыуарҙың ҡулында һәр саҡ тере аҡса бар кеүек. Ләкин күпселек эшҡыуарҙың килеме банкҡа инеп ятмай, ә әйләнештә йөрөй, йәғни бөгөн килгән килеменә ул иртәгелеккә тауар йәки эш өсөн кәрәк башҡа әйберҙәр һатып ала. Шуға күрә, әлегә тиклем түләнгән барлыҡ һалымдарға өҫтәп, кесәңдән тағы ла 15 мең һум тирәһе аҡса сығарыу ауыр һынау буласағын күптәр аңлай. Был үҙенең һөҙөмтәһен күрһәтә башланы ла инде - күпселек эшҡыуарҙың артабан эшмәкәрлек алып барыуға ҡарағанда, үҙ эштәрен ябыуҙы хуп күрҙе.

Шәхси эшҡыуарҙарҙың Берҙәм дәүләт реестры мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2013 йылдың 1 ғинуарына Рәсәйҙә 4 030 309 шәхси эшҡыуарлыҡ теркәлгән булған, шуларҙың 141 695-е - фермер хужалыҡтары, ә ҡалған 3888614-е - башҡа өлкәлә мәшғүл шәхси эшҡыуарҙар. Бөгөн килеп, шуларҙың 400 меңдән ашыуы үҙ эшмәкәрлеген туҡтатҡан. Әлбиттә, был һан эсендә шәхси эшҡыуарҙың үлеме сәбәпле, сит ил гражданынның визаһы ғәмәлдән сығыу һөҙөмтәһендә, шулай уҡ суд ҡарары менән ябылған шәхси эшҡыуарлыҡтар ҙа бар. Ләкин, эксперттар белдереүенсә, эшҡыуарҙарҙың ҡаш менән күҙ араһында кәмеүе нәҡ социаль иғәнәләр күләменең артыуына бәйле. Улар фекеренсә, бөгөнгө көнгә теркәлгән эшҡыуарҙарҙың дөйөм алғанда 30-40 проценты йыл аҙағына тиклем үҙ эшмәкәрлеген туҡтатасаҡ. Ә ҡайһы бер эшҡыуарҙар иһә "күләгәгә" китеп, һалым һәм социаль түләүҙәрҙән ҡасасаҡ. Быны, ысынлап та, шулай булырына ышанырға була, сөнки артабан социаль түләүҙәр тағы ла артасаҡ, тип көтөлә. Быға тиклем ул хеҙмәт хаҡының бер минималь күләменә тура килһә, быйылдан иһә хеҙмәт хаҡының ике минималь күләменән сығып билдәләнә. Алдағы йылдарҙа страховка иғәнәһе хеҙмәт хаҡының ике ярым минималь күләменән, ә 2015 йылдан иһә өс минималь күләмдән сығып иҫәпләнәсәк. Әйтергә кәрәк, хеҙмәт түләүенең минималь күләме лә алдағы йыл менән сағыштырғанда артып, бөгөн ул 5205 һум тәшкил итә һәм артабан да күтәрелеүен дауам итәсәк.

Страховка түләүҙәрҙең күләмен арттырып, Рәсәй Пенсия фондында барлыҡҡа килгән "тишекте" ҡапларға уйлағайнылар ҙа, ниәт тормошҡа ашманы. Унын урынына, был яңылыҡтар шәхси эшҡыуарлыҡ өлкәһенең нигеҙен арыу ғына ҡаҡшатты. Рәсәй Хеҙмәт министрлығында белдереүҙәренсә, шәхси эшҡыуарҙарға киләсәктә һайлау мөмкинлеге биреләсәк. Ул нимәгә ҡайтып ҡала? Шәхси эшҡыуар эшмәкәрлек алып барған осорҙа Пенсия фондына социаль түләүҙәрҙе әҙерәк түләй, ләкин хаҡлы ялға сыҡҡас, ҙур суммалағы пенсияға дәғүә итә алмай. Йәғни шәхси эшҡыуар Пенсия фондына әле күсергән түләүҙәренән сығып, киләсәктә үҙенең күпме пенсия аласағын билдәләйәсәк. Әлбиттә, иртәгәһе көндө ҡайғыртып йәшәү кәрәк, ләкин унын бөгөнгөһө лә бар һәм ул, ҡыҙғаныҫҡа күрә, әллә ни шатланырлыҡ түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәй Президенты эшҡыуарҙарҙың хәүефен аңлауын һәм ил хөкүмәтенә был һорауға мотлаҡ кире ҡайтып, иғәнәләр күләме күтәрелеүенең маҡсатҡа ярашлы булыу-булмауын тикшереү бурысын ҡуясағы хаҡында белдерҙе. Ҡайһы бер эшҡыуарҙар фекеренсә, күптәрҙең эшенә аяҡ салыусы был ҡарарҙы юҡҡа сығарыу ғына түгел, ә түләнгән иғәнәләрҙе кире ҡайтарып биреү мәсьәләһен дә тикшереү мөһим. Ләкин хөкүмәт тарафынан быңдай аҙымдың эшләнеүе икеле, шуға күрә, киткән аҡсаларҙы кире ҡайтарыу тураһында түгел, ә артабан нисек йәшәү һәм эшләү хаҡында ҡайғыртыусы, юлын эҙләүсе эшҡыуарҙар күберәкте отор, моғайын.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП

**Фәтих АЛЛАЯРОВ, Йылайыр районы:** Өс йыл элек мебель эшләү буйынса үҙ эшемде астым. Оҙаҡ йылдар был эшмәкәрлек менән булһам да, рәсми рәүештә теркәлергә, тигән уй бөтөнләй юҡ ине. Мәшғүллек үҙәге тарафынан биреләсәк аҡсаға алданып ҡына харап булдым. Алдандым, тием, сөнки был аҙымдан мин бер нәмә лә отманым, бары тик отолдом ғына. Тып-тыныс йәшәп ятҡан ерҙән һалымдар, төрлө иғәнәләр һаҙлығына барып баттым. Ә быйыл Пенсия һәм Мотлаҡ медицина страховкаһы фондтарына түләнгән социаль иғәнәләрҙең күләмен тағы ла арттырыуҙары бәкәлгә ныҡ һуғыр ине, шуға күрә был яңылыҡты ишетеү менән эшемде яптым. Был аҙымыма үкенмәйем, сөнки үҙем дә аңлап етмәгән отчеттар биреүҙән һәм, иң мөһиме, ғаиләм ауыҙынан тартып алып түләнеп килгән һалымдарҙан азатмын. Хөкүмәттең иғәнәләрҙе арттырыуына рәхмәт әйткем килә, сөнки улар ошо аҙымға бармаһа, мин әле һаман шәхси эшҡыуар тигән исемгә алданып, аҡсамды елгә осороп йәшәп ятҡан булыр инем.

**Хәлимә ЗӘЙҘУЛЛИНА, Әбйәлил районы:** Шәхси эшҡыуарлыҡҡа эшемдең уңышлы булырына шул тиклем ышанып, оло дәрт менән тотонғайным, ысынбарлыҡ минең хыялдарҙан күпкә алыҫ булып сыҡты. Шулай ҙа әлегә тиклем, килем бармы-юҡмы, эшем ҡәнәғәтлек килтерә ине. Ауырға тура килһә лә, барлыҡ һалымдарҙы ла ваҡытында һәм теүәл түләп барҙым. Ләкин бынау иғәнәләрҙе арттырыу тамам күңелемде һүрелтте, эшемә аяҡ салды. Етмәһә, элек 5 мең түләп алған патентты да хаҡы 18 меңгә күтәрелгән. Шуға күрә эшемде ябырға ҡарар иттем. Хәҙер тегеүгә булған заказдарҙы өйҙә эшләйем. Минең эшемде ябыуым, беренсенән, дәүләткә зыян килтерҙе, сөнки быға тиклем һалымдар аҡсаһы ҡаҙнаға аҡмаһа ла, тамып торҙо. Икенсенән, миндә эшләп йөрөгән һәм ҡулына әҙмекүпме тере аҡса алып барған ике эшсемде эшһеҙ итте.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында тағы бер кәлимә һүҙ



Шәйех Зәйнулла бин Хәбибулла Нәкшбәнди дин әһеле остазы ғына түгел, уны беҙ шағир мөнәжәтсе лә итеп беләбеҙ. Беҙ йәш ваҡытта халыҡ араһында уның фәлсәфәүи вәғәздәрен, мөнәжәттәрен көйгә һалып табындарҙа һөйләй һәм йырлай торғайнылар. Уны оло һәм кесе ҡарый, тип йөрөтөлгән Әүеш ауылы аҡһаҡалдары Нурислам һәм Әүбәкер көйгә үк һалып әйтер булған. Улар икеһе лә - Зәйнулла ишандың шәкерттәре. Олоһо - 1890, ә кесеһе 1896 йылғы самаһы. Кесеһе алтмышынсы йылдарҙан һуң әле тере ине.

Етмешенсе йылдар башында һабантуй мәжлесе ваҡытында өс туған апайымдан - йырсы, мандолинасы, дини ҡарашлы Ильясова Фәйхүнә Әүбәкир ҡыҙынан Зәйнулла ишандың әлегә бер ерҙә лә баҫылмаған оҙон ғына мөнәжәтенең бер өлөшөн яҙып алып ҡала алдым. Уны Фәйхүнә апай ниндәйҙер иҫке мөнәжәт көйөнә бик ағымлы, һағышлы итеп йырлағайны.

*Мөнәжәттәр яҙа, яҙа,*
*Ҡәләм тоткан ҡулым талды.*
*Был илдәргә килмәҫ инем,*
*Ризыктарым мине тартты.*

Мөнәжәттең был өлөшө, күрәһең, ишан 1873 йыл йәй айында Кострома өлкәһе Никольск ҡалаһына һөргөнгә килеп еткәс яҙғандыр, тип уйланыла.

Мөнәжәт тексын яҙып алып ҡала алмағанлыҡтан, нәмә бар, шунын менән дауам итергә мәжбүрмен. Мөнәжәттең килһе дүрт юллыҡтары хәтирәгә һәм кемгәлер рәхмәт йөҙөнән яҙылғанға оҡшай.

*Ҡунаҡ булдым өйөгөҙҙә,*
*Зекер әйттем түрегеҙҙә.*
*Иман нуры йөҙөгөҙҙә,*
*Яҡты булһын гүрегеҙ ҙә.*

*Был мәжлестәр мөбәрәк булһын,*
*Жәнебеҙ беҙҙең ҡубәләк булһын.*
*Жәнебеҙ беҙҙең ҡубәләк булып,*
*Тубый ағасына ҡунһын.*

*Сәхрәләрҙә бер ағас бар,*
*Ҡоштар ҡунһа тәсбих әйтә.*
*Мөхәммәт өммәте алға уҙһа,*
*Етмәйме шул дәүләт беҙгә.*

*Рәсүлулла бораҡтары_*
*Ҡара тояҡ аяҡтары.*
*Изге доғалар ҡылайыҡ,*
*Фани донъя ҡунаҡтары.*

Зәйнулла ишан ғүмере буйына кешеләргә хеҙмәт итә. Ауырыуҙарға дауа бирер, мохтаждарға ярҙам ҡылыр, йомошсоға йомошон йомошлар. Әммә унын халҡыбыҙға ҡалдырған ин ҙур мираҫы - мәғрифәтселек. Мәғрифәтселек тойғоһо уға Троицкиҙа Әхмәтшаһ бин Хәлиф әл Мәнгәрәй мәҙрәсәһендә һабаҡ алып, уны тамамлау тураһындағы таныҡлығын тотоп, хәҙерге Учалы районы Аҡҡужа ауылына имам-хатип булып ҡайтҡас уҡ тоҡана.

Зәйнулла Рәсүлев Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Үҫәргән ырыуҙарынан үҙе ише имам-хатиптар менән 1862 йылдарҙа уҡ олоҫтарҙа мәктәптәр астырыу һорауы менән Ырымбур губернаторына бара. Ул хатта кантон идаралығынан был маҡсатты тормошҡа ашырыуға юллама алырға ла өлгөшә. Губернатор был имамдар вәкәләтлеген тынлағанмы, юҡмы, уныһы беҙгә билдәһеҙ. Әммә 1865 йылда олоҫ үҙәге Туңғатар ауылында 10 балаға иҫәпләнгән рус-башҡорт мәктәбе асыла. Губернатор ул мәктәпкә үҙ "күҙ-ҡолағын", Неплюев кадет корпусын тамамлаған хорунжий Абдуллатиф Урусовты уҡытыусы итеп ебәрә. Ул мәктәптә урыҫ телендә уҡырға, яҙырға өйрәтә һәм арифметиканан һабаҡтар бирә. Ә гәрәп графикаһында башҡортса уҡырға һәм яҙырға Туңғатарҙағы Уйылдандар һәм Ҡарамыш тоҡомдары хәлфәләре уҡыта. Шундай уҡ мәктәпте Мулдаҡай ауылында ла асалар. Ләкин унда рус телендә яҙма һәм уҡыуҙы өйрәтеүсе уҡытыусы булмағанлыҡтан, мәктәп яртылаш йәҙитсә, яртылаш мәҙрәсә кимәлендә ҡала.

Олоҫ үҙәге Туңғатарҙа мәктәп асылыуы тураһында Әнүәр Әсфәндийәров та архив материалдарына таянып "Ауылдар тарихы" китабында яҙа.

2008-2009 йылдарҙа Башҡортостан Президенты һәм хөкүмәте ҡарары менән Туңғатарҙа бик күркәм мәктәп бинаһы төҙөлөп, халыҡты ла, балаларҙы ла ҡыуандырғайнылар. Рәсәй һәм Башҡортостан кимәлендәге бик күп шәхестәрҙе биргән был мәктәп бөгөн ябылыу сигендә. Батша губернаторының фатиһаһы менән асылып, Рәсәйҙең барлыҡ ауыр, ҡанлы дәһшәтле йылдарында ла дәүләт тарафынан ябылмаған был мәктәп бөгөн мәңгелеккә юҡ булыр өсөн упҡын ситенә этәрелде.

2013 йылдың мартында Зәйнулла ишандың тыуыуына 180 йыл тулды. Башҡорттоң олуғ был затының үҙе яҙып ҡалдырып, Ризаитдин Фәхретдин тарафынан халыҡҡа еткерелгән шәжәрәһе түбәндәгесә:

Туҡһаба бей сама менән 1230-1240 йылдарҙа йәшәй. Уның улы Ҡанлы - Минтәй - Шәйехмамай - Һеркә - Манғут - Ятабей - Яныш - Ураҙғәли - Тупый - Мораткол - Солтанай - Ғашиҡ - Байрамғол - Муса - Рәсүл - Хәбибәлла - Зәйнулла.

Уҡыусы өсөн был шәжәрәнән, ҡабатлап булһа ла, тағы ла шуны өҫтәргә кәрәк. Шәйех Зәйнулланың Мәхүбә исемле ҡатынынан тыуған өлкән улы Ғабдрахманды 1936 йылда, Ризаитдин Фәхретдин вафат булғас, Башҡортостан мосолмандры Диниә назаратының мөфтөйө итеп һайлап ҡуялар. Уның Ғабдулла, Ғәбделҡадир, Ғәбделсабур тигән улдары хажға барғандан һуң Төркиәлә уҡый. Ғабдулла шиғырҙар яҙған. Рус, төрөк, ғәрәп, ҡаҙаҡ телдәрен яҡшы белгән. Ул 1914 йылда һуғышҡа алына. Офицер була. Үлеме билдәһеҙ. Ғәбделҡадир Рәсүлиә мәҙрәсәһе ябылғас, Ҡазанға китә. Әстерханда имам булып эшләй. Татар яҙыусыһы Атилла Рәсих - уның улы.

Зәйнулланың бер туған ҡустыһы Фәтхулланың ике улы була. Ғайса һәм Муса. Муса вафатына тиклем Учалы районының Ахун ауылында имам була. Генерал Дашковтың ҡыҙына өйләнгән була. Әммә ҡатыны кинәт кенә донъя ҡуя. Унан ҡалған ҡыҙҙы Мусаға бирмәйҙәр. Икенсе ҡатыны Ғәйшә Малай Муйнаҡ ауылында имам-хәлфә булып эшләгән Әхмәт улы Яҡуптың ҡыҙы була. Муса Яҡуп хәҙрәт ҡыҙына өйләнгән осорҙа Ахун ауылына имам-хатип булып ҡуҫҡан була.

Мусаның ағаһы - Ғайса. Буласаҡ ахун. Рус-япон һуғышы батыры. Батшанан наградалары була. Башҡорт халҡына атаҡлы Ғайса йырын бүләк иткән кеше. Әммә Өфө фәлсәфиҙәре Ғайсаға "Илсе" исеме тағып ҡуя. Ул бер ҙә илсе булмаған. Полк муллаһы була ул. 1904-1905 йылдарҙа Порт-Артурҙы, Харбин һ.б. ҡалаларҙы оборонялауҙа ҡатнаша. Әле киң йәмәғәтселеккә билдәле булмаған йыр һүҙҙәре бихисап. Уның тураһында ла хәтирәләр әлегә тиклем халыҡ күңелендә һаҡлана. 1921 йылда тифтән үлә. Ҡәбере Иҫке Байрамғол - Әүеш - Әүлиә тау итәгендәге маҙарлыҡта.

Ғайса ахундың оло улы Таяр. 1918 йылда башҡорт ғәскәрҙәрен төҙөүҙә ҡатнаша. Үҙен коммунист тип атап йөрөгән рус шовинисы Каләс (русса Калачев булһа кәрәк) өйөнән саҡырып сығарып, Шәрип ауылында ҡапҡаһы төбөндә атып китә.

Ғайса ахундың икенсе улы Талха. Ҡаһирәлә уҡый. Һигеҙ-туғыҙ телдә иркен һөйләшкән була. Милли-азатлыҡ хәрәкәтен ойоштороусыларҙың береһе. Әхмәтзәки Вәлидиҙең тоғро көрәштәше. Ә. Вәлиди менән Урта Азияла советтарға ҡаршы көрәшә. Японияла Ҡорбанғәлиевтар менән бер осор бергә була. Аҙаҡ Ҡытайҙа йәшәй. 1972-1974 йылдарҙа Талханы күрепбелгән кеше әле лә бар. Ул үҙе бер оло хикәйәт. Ул турала ла яҙырға насип булһа ярар ине.

Ғайса ахундың ҡыҙы Талиба Ауырғазы районында мәғариф бүлеге мөдире, Бөтә Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙар съезы делегаты була. Репрессиялар башланғас, 1937 йылда Урта Азияға китә.

Ғайса ахундың кесе ҡыҙы Таһира һуңғы йылдарғаса Ҡаҙағстанда йәшәне. Балалары әле лә Әүлиә тауына, Әүлиә шишмәһенә килеп йөрөйҙәр.

Ғөмүмән, Рәсүлевтарҙың шәжәрәһе бының менән генә сикләнмәй. Араларында төрлә һөнәр кешеләре бихисап.

Шулай итеп, Зәйнулла Рәсүлевты беҙ бөгөн дә Рәсәйҙәге мосолман йәмғиәтенең генә түгел, бөтә ислам донъяһының мәшһүр заттарының иң олуғы, абруйлыһы, ғилемлеһе, бөйөк дин әһеле тип иҫкә алайыҡ.

Йөҙөп барған болотто бер урында тотоп булмай, әммә ул һәр саҡ беҙгә кире әйләнеп килеп, тағы ла оҙағыраҡ ултырып шифалы һыуын яуҙырып китһә, ер йәшәрер, рухиәтебеҙ янырыр. Шуға өмөт итәйек.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Аҙағы. Башы 16-18-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Тотош Урал алды башҡорттары "солоҡ" тип ҡыуышында ҡырағай бал ҡорттары йәшәгән барлыҡ ҡарт ағастарҙы атаған. Боронғо Рустә лә ул шундай мәғәнәлә йөрөгән. Һуңыраҡ Белоруссия менән Украинала урмандағы ағасҡа элеп ҡуйылған умарталарҙы солоҡ тип атай башлағандар. Башҡорттар, алда әйтеп күтелгәнсә, балды ҡырағай ҡорттар йәшәгән ҡыуышлы ағастарҙан алған һәм уларҙы махсус рәүештә эҙләп йөрөгәндәр. Әммә быға тиклем үк улар ағастың эсен соҡоп, яһалма солоҡтар ҙа эшләгән. Һуңынан уларға ҡырағай бал ҡорттары оялаған. Тап шул ваҡыттан умартасылыҡ башланған да инде.

Урманда табылған, ҡырағай бал ҡорттары эйәләшкән эсе ҡыуыш ағасты тапҡан кеше уға үҙенең тамғаһын һалған. Бал алыу өсөн ҡыуыш ауыҙы киңәйтелгән, уға ҡалыптар ҡуйылған һәм йыл һайын унан билдәле күләмдә бал ағыҙып алынған.

Яһалма солоҡ ҡуйыу өсөн диаметры 60 сантимерҙан да кәм булмаған ҡарт ағастар, бигерәк тә ҡарағай, ҡарағас, имән йәки ҡарама һайланған. Һайланмыш ағасҡа тамға һалынған һәм башҡорт унда ҡыуыш эшләй башлаған. Ул ерҙән 6-8 метр бейеклектә урынлаштырылғас, башта ағасҡа менергә кәрәк булған. Башҡорттарҙа ағасҡа менеү ысулы бик ябай. Ерҙән бер метр бейеклектә ағаста ике яҡлап аяҡ менән терәлеп тороу өсөн уйым уйылған. Артабан киңлеге 5 сантиметр, оҙонлоғо 5 метр булған, сей килеш ат тиреһенән үрелгән яҫы кирәм (ҡайыш) алынған. Уның ике осонда элмәк яһалған. Башҡорт ошо ике уйымға менеп, ҡайыш менән ағасты һәм үҙен бил тәңгәленән ураткан. Ошо бейеклектә кирәмде эләктергәс, уға арҡаһы менән терәлеп, артабан ағаста яңы уйымдар яһаған һәм аяҡтары менән ҡабат уларға баҫып күтәрелеп, бер ыңғай ҡайышты ла күтәргән. Кәрәкле бейеклеккә еткәс, ул ағасҡа баҫып тороу өсөн махсус ҡулайлама - ағас аяҡ бәйләгән. Ошо ҡулайламаға баҫып, ул үҙен бил тәңгәленән ағасҡа ҡайыш менән нығытҡан да, бал алырға тотонған.

Тире кирәме бик ҡиммәт булғас, ярлыраҡ башҡорттар уны йүкәнән үргән. Ағас аяҡ һәр саҡ ағасты ҡырҡҡанда уның формаһына тура килтереп бөгөлгән формала эшләнгән, өҫкө яғында баҫып тороу майҙансығы, остарында киртек булған. Улар ярҙамында ул ағасҡа бәйләнгән.

Ҡыуышта бал ҡорттары урынлашһын өсөн уйым яһағанда махсус ҡорамалдар файҙаланылған: ҙур һаплы бәләкәй балта; махсус тимер бөрөҙ, бағау, терпе, йышҡы.





Умартасының бәләкәй балтаһына туҙған эшләнгән махсус һауыт - балта ҡын кейҙерелгән. Ул балтаны йә тулыһынса, йә уның өҫтән ике өлөшөн генә ҡаплаған.

*✓ Ауылда йәшәгән саҡта, Өфө - беҙҙең баш ҡалабыҙ, унда бөтөн нәмә таҙа, ялтырап яталыр, тик һәйбәт кешеләр генә йәшәйҙер, тип уйлай торғайным. Әммә ысынбарлыҡ аяуһыҙ булып сыҡты.*

# УРЫН КЕШЕНЕ БИҘӘМӘЙ...

## кеше урынды биҙәй!

**Совет заманында "Бөтөн һөнәр ҙә кәрәкле, теләгәнен һайла" тигән девиз йәшәй торғайны. Әммә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, хеҙмәтте генә түгел, хатта кешеләрҙе лә айырып ҡарау, ярлы-байға бүлеү күҙәтелде. Ә инде ата-әсәләр балаларына абруйлыраҡ һаналған һөнәрҙәр буйынса белем алдыртырға тырышты. Һөҙөмтәлә, бөгөн илдә дипломлы юристар, иҡтисадсылар, менеджерҙар һәм башҡаларҙың күпселеге эшһеҙ статусында һәм икенсе һөнәр үҙләштереү менән мәшғүл, ә шул уҡ ваҡытта ҡасандыр тотош илде туйҙырған игенсе, ашнаҡсы, тегенсе, ташсы, водитель һ.б. эшсе һөнәрҙәренә ҡытлыҡ кисерелә. Ҡайһы бер уҡыу йорттары эш алымын үҙгәртеп, хеҙмәт баҙарындағы бушлыҡты тултырырға тырыша. Ҡасандыр Өфөнөң 1-се педколледжы булып танылыу алған уҡыу йорто ла хәҙер, "күрше" 38-се полиграфия лицейы менән берләшкәндән һуң, 1-се Өфө киң профилле профессиональ колледж тип атала. Уның исемен алмаштырыу есеменә йоғонто яһанымы икән? Ошо һәм башҡа көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында колледж студенттары Зилә Нурыева (3-сө курс), Айһылыу Айытбаева (1-се курс), Лилиә Дәүләтбаева (1-се курс), Миңлегөл Ишҡыуатова (5-се курс) менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**Миңлегөл:** Ике уҡыу йортон берләштереү процесын бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, бер ниндәй проблемаһыҙ атҡарып сығыуҙа директорыбыҙ Рәфҡәт Самат улы Үмәрғәлиндың, шулай уҡ педагогтар коллективының ролен билдәләп китергә кәрәктер. Улар ике уҡыу йортоноң студенттарын бергә туплай алды. Ул ғына ла түгел, оптималләштереү, ҡыҫҡартыуҙар тойолманы ла. Хатта уҡыу йортобоҙҙоң киң профиллегә әйләнеүе өҫтәмә һөнәрҙәргә эйә булыу мөмкинлеге лә тыуҙырҙы. Шуныһы ғына үкенесле: башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренә бүленгән сәғәттәр һиҙелерлек кәмене.

**Лилиә:** Хәҙер беҙҙә башланғыс профессиональ белем биреү ҙә, урта профессиональ белем биреү ҙә тормошҡа ашырыла. Беҙҙә ашнаҡсы, парикмахер, секретарь-референт, тегенсе, флористика һөнәрҙәренә лә эйә булырға мөмкин. Теләүселәр төрлө һөнәрҙәр буйынса өҫтәмә белем ала, төрлө түләүле курстарҙа шөғөлләнә. Был инде колледжды киң профилле булып тамамлау мөмкинлеген бирә. Яңыраҡ ҡына колледжда тағы ла физик культура, тәбиғи информатика бүлектәре асылды.

**Миңлегөл:** Быйыл беренсе тапҡыр, колледждың 75 йыллығы уңайынан, беҙҙең студенттар Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендәге рус телле мәктәптә практика үтте. Шуға күрә беҙҙең белем усағы сит ил кимәлендә лә хеҙмәттәшлек итә, тип әйтергә мөмкин. Был да уҡыу йортобоҙҙоң эш йүнәлешен үҙгәртеүе һөҙөмтәһе, тип уйлайым.

**▸ Бөгөн Рәсәйҙә педагогик кадрҙар ҡыҫҡартылып, тап эшсе һөнәрҙәренә ихтыяж арта һәм хатта эшсе һөнәрҙәренең абруйын арттырыу буйынса эшмәкәрлек тә алып барыла. Киләсәктә һайлаған һөнәрегеҙ буйынса эш булмауы ла ихтимал, тип уйламайһығыҙмы? Шундай көтөлмәгән һынау алдында аптырап ҡалмаҫ өсөн ниндәй "запас аэродром" һайланығыҙ?**

**Зилә:** Мин әлеге ваҡытта секретарь-референт һөнәрен дә үҙләштерәм. Артабанғы хыялым - медицина үрҙәрен яулау. Колледжда үҙләштерергә мөмкин булған өҫтәмә һөнәрҙәр араһында профессиональ массажист һөнәре лә бар. Әлбиттә, был курстар түләүле, ләкин ҡулыңа массажист дипломы алһаң, тотонолған сығымдарыңды бер нисә сеанстан һуң да ҡайтарып алырға мөмкин.

**Миңлегөл:** Мин беренсе курста уҡ психолог курстарында шөғөлләндем. Ғөмүмән, беҙҙә төрлө өҫтәмә курстар күп, улар өсөн түләү ҙә әллә ни ҡиммәт түгел. Бөгөн шул сумманы үҙеңдең белемеңде арттырыуға инвестицияләһаң, бер нисә йылдан һуң унының ниндәй файҙа, килем килтеререн күҙалларға була.

**Лилиә:** Беҙ үҙләштергән төп һөнәр - уҡытыусы һәм был һөнәргә эйә булғандар барыбер бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясаҡ. Унан һуң, заман талап иткән башҡа йәнәш һөнәрҙәргә лә эйә булабыҙ уҡыу йортобоҙҙа. Мәҫәлән, менеджмент, психология нигеҙҙәрен бик яҡшы уҡыталар бында. Шуға күрә мин, уҡыуҙы тамамлағас, тормош даръяһында эш тапмай аҙашып ҡалырбыҙ, тип уйламайым.

**▸ Заман талаптарына яраҡлашыу маҡсатында хәҙер шәхси балалар баҡсалары асыу, хатта ауылдарҙа ябылған мәктәптәр урынына шәхси мәктәптәр асыу тураһында фекерҙәр ҡуйыра. Ошо проблемаға ҡарашығыҙ: дәүләттән генә көтөп ятырғамы, әллә инвесторҙар табып йәки халыҡ менән бергәләшеп, шәхси эшеңде асып, ниндәйҙер кимәлдә эш урындары булдырырғамы?**

**Айһылыу:** Дәүләттән генә көтөп ятып булмай, юҡҡа ғына боронғолар "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тимәгән. Әгәр, ысынлап та, дәүләттең халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә теләге юҡ икән, был мәсьәләләрҙе белемле йәштәр үҙ ҡулына алырға тейештер. Алла бойорһа, әлеге уҡыуымды тамамлап, юғары уҡыу йортонда белем алыуҙы дауам итеп, тыуған районыма ҡайтып, үҙ эшемде асҡым килә минең дә. Хыялым - тыуған районымда халыҡты эш менән тәьмин итеү.

**Зилә:** Мин дә үҙемдең эшемде асыр инем, тип уйлайым. Тырышлығың һәм теләгең булһа, алдыңа маҡсат ҡуйып, шуға өлгәшергә була. Бары тик үҙеңде сикләргә ярамай. Беҙ бит шулай өйрәнгәнбеҙ: бер тапҡыр нимәләр тотоноп, эшләп ҡарайбыҙ ҙа, барып сыҡмаһа, булмай, тип ҡул һелтәйбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Минеңсә, тап шундай уңышһыҙлыҡ кисергәндән һуң да туҡтап ҡалмай, юлыңды маҡсатыңа өлгәшкәнсе дауам итергә кәрәк.

***Уҡытыусыларыбыҙ һәр студентҡа шәхес итеп ҡарай, һәр кемгә ярҙамға килергә әҙер ысын педагогтар. Улар беҙҙе, лекцияны теүәл яҙ, шул-шул хеҙмәттәрҙе күсереп ал, тигән талаптар менән йонсотмай, ә һәр беребеҙҙең мөмкинлеген күҙҙән үткәрә, күңелдәргә күҙ һала, дәрт-дарман өҫтәп тора торғандарҙан. Уларҙың бындай мөнәсәбәте беҙгә психологик яҡтан бик ыңғай тәьсир итә. Педагогтарыбыҙҙың да үҙ ғаиләһе, үҙ хәстәре етерлек, әммә улар дәресен тамамлағас та ҡайтып китергә ашыҡмай, студенттар менән аралашыуҙы дауам итә. Улар күҙенән кәйефеңде лә, ҡырыныраҡ эшеңде лә, шулай уҡ матур эштәреңде лә йәшереп булмай. Кемделер аҡыллы кәңәштәр биреп, кемделер тәнҡитләп, тура юлға төшөрөп ебәрәләр, кемделер маҡтап, дәртләндерәләр. Күңелең тулғанда улар эргәһендә ултырып илап, күңелеңде лә бушатырға мөмкин. Беҙҙең колледжда бына шундай мөнәсәбәттәр урынлашҡан педагогтар һәм студенттар араһында.***

**Миңлегөл:** Ысынлап та, халыҡ дәүләттән генә көтөп ултырырға күнеккән шул. Ошо ғәҙәттәренән арындырыр кәрәк уларҙы. Ҡайһы бер ауылдарҙа быға тиклем балалар баҡсаһы, мәктәп урынлашҡан биналар буш ултыра. Ул биналарҙа шәхси балалар баҡсалары асырға була. Дәүләттән көтөп ултырғансы, дилбегәне үҙ ҡулыңа алыу барыбер һәйбәтерәк инде.

**▸ Хәҙер белем биреүҙең яңы стандарттары буйынса, һәр балаға индивидуаль ҡараш кәрәк, тип баралар. Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ: балалар коллектив рухында тәрбиәләнергә тейешме, әллә һәләтенә ҡарап, һәр беренә айырым ҡараш, айырым тәрбиә бирелергә тейешме?**

**Миңлегөл:** Һәр бала - шәхес. Уның һәләтенә ҡарап, айырым ҡараш булырға тейеш. Мәҫәлән, ул һүрәт төшөрөргә ярата, ләкин бейергә яратмай, уға тәбиғәттән был һәләт бирелмәгән икән, уны көсләп бейергә өйрәтергә ярамай. Балалар баҡсаһынан башлап мәктәпте тамамлағансы баланың тәбиғәттән бирелгән һәләтен үҫтерергә кәрәк. Әгәр ата-әсәнең береһе - уҡытыусы, икенсеһе агроном икән, ти. Ә балалары йырсы булырға теләй. Әммә ата-әсә иң абруйлы тип юрист һөнәрен иҫәпләй һәм балаһын юрист итеп күрергә теләй. Ата-әсә ихтыярына күнеп, балалары улар теләгән уҡыу йортон тамамларға ла мөмкин, ләкин артабан ул был һөнәрҙе үҙ итерме, шөғөлө уға ҡәнәғәтлек килтерерме?

Хатта бына беҙҙең колледжда ла һәр студентҡа индивидуаль ҡараш бар, тип әйтер инем. Уҡытыусыларыбыҙ һәр студентҡа шәхес итеп ҡарай, һәр кемгә ярҙамға килергә әҙер ысын педагогтар. Улар беҙҙе, лекцияны теүәл яҙ, шул-шул хеҙмәттәрҙе күсереп ал, тигән талаптар менән йонсотмай, ә һәр беребеҙҙең мөмкинлеген күҙҙән үткәрә, күңелдәргә күҙ һала, дәрт-дарман өҫтәп тора торғандарҙан. Уларҙың бындай мөнәсәбәте беҙгә психологик яҡтан бик ыңғай тәьсир итә. Педагогтарыбыҙҙың да үҙ ғаиләһе, үҙ хәстәре етерлек, әммә улар дәресен тамамлағас та ҡайтып китергә ашыҡмай, студенттар менән аралашыуҙы дауам итә. Улар күҙенән кәйефеңде лә, ҡырыныраҡ эшеңде лә, шулай уҡ матур эштәреңде лә йәшереп булмай. Кемделер аҡыллы кәңәштәр биреп, кемделер тәнҡитләп, тура юлға төшөрөп ебәрәләр, кемделер маҡтап, дәртләндерәләр. Күңелең тулғанда улар эргәһендә ултырып илап, күңелеңде лә бушатырға мөмкин. Беҙҙең колледжда бына шундай мөнәсәбәттәр урынлашҡан педагогтар һәм студенттар араһында.

**Лилиә:** Ата-әсәләр балаларға ярҙам итергә, йүнәлеш бирергә тейеш, тик үҙенең ихтыярына буйһондорорға түгел. Һөнәр һайлағанда мотлаҡ баланың фекере, ҡыҙыҡһыныуҙары иҫәпкә алынырға, уның үҙенең һайлағаны хупланырға тейеш. Бының өсөн иң элек бала менән һөйләшергә, уға нимә оҡшай, нимә оҡшамай икәнен асыҡларға кәрәк, бер аҙ ғына төҙәтмә индереп ебәрергә, кәңәш итергә мөмкин. Был ата-әсәләргә генә түгел, мәктәп уҡытыусыларына ла ҡағыла. Мин был йәһәттән үҙемде бәхетле һанайым, сөнки мәктәптә уҡыған-да уҡытыусыларым минең әҙәбиәткә тартылыуымды күреп, шул юлдан китеүемде хупланы, ярҙам итте. Колледжда ла был һәләтемде күреп ҡалдылар һәм хәҙер мин төрлө әҙәби сараларҙа әүҙем ҡатнашам, шиғыр яҙыу оҫталығымды камиллаштырам.

**Айһылыу:** Һәр кеше үҙенсә уйлай, донъяны үҙенсә күрә, ҡабул итә. Шуға күрә, тирә-яҡтағыларҙың фекерен тыңлап түгел, ә үҙеңә тәғәйен һөнәрҙе һайларға, үҙ юлыңдан тайпылмай алға барырға кәрәк. Хатта бер ғаиләлә лә балалар бер төрлө генә түгел. Өҫәүҙәр икән - уларҙың өсөһөнә өс төрлө мөнәсәбәт талап ителә. Мин ғаиләлә туғыҙынсы бала, әсәйем гелән, апайҙарың кеүек эшләмә, үҙеңсә эшлә, тип тылҡый торғайны. Уның кәңәштәре миңә тормошта бик ныҡ ярҙам итә: мин башҡалар артынан эйәрмәйем, башҡалар ҡылғанды ҡыланмайым, барыһын да үҙемсә эшләргә тырышам.

**▸ Баҙар шарттарында йәшәһәк тә, һәр кем үҙенең тыуған еренең генә түгел, белем алған белем усағының да патриоты булырға тейеш. Үҙегеҙҙе менеджер роленә ҡуйып ҡарап, абитуриенттарға ни өсөн тап һеҙҙең уҡыу йортон һәм тап һеҙҙең һөнәрҙе һайларға кәрәклеген нисегерәк аңлатыр инегеҙ?**

**Зилә:** Документтар менән эшләргә, төрлө эш ҡағыҙҙары тултырырға, яңы проекттар төҙөү өсөн өлгөләр уйлап сығарырға, персональ компьютер менән һин дә мин "һөйләшергә", башҡорт һәм рус телдәрендә яҡшы һөйләшергә, төрлө закондарҙы белер-

гә, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорорға, аралашыу культураһына эйә булырға теләйһең икән, тимәк, секретарь-референт һөнәре тап һинең өсөн. Секретарь эшендә иң мөһиме - түҙемлек һәм һәр кемде йылмайып ҡаршы алыу. Юҡҡа ғына, һин йылмайһаң, һиңә яуап итеп бар донъя йылмая, тимәйҙәрҙер.

**Лилиә:** Башланғыс синыф уҡытыусыһына кешелектең иң ҙур бурыстарҙың береһе йөкмәтелгән: кескәйҙәр башына башланғыс белем, күңеленә матурлыҡ, изгелек һалырға. Ата-әсәнең генә түгел, ә дәүләттең, киләсәгебеҙҙең дә ныҡлығы, яҡтылығы ошо балаларҙың белеменә, аң кимәленә, күнел изгелегенә бәйләнгән. Нигеҙ ныҡлы булһа, уға нисә ҡатлы өй ултыртһаң да, ул уны



күтәрәсәк. Шулай итеп, иң ҙур яуаплылыҡ - башланғыс синыф уҡытыусыһында. Кем үҙенә ошо яуаплылыҡты алырға ҡурҡмай - уны үҙебеҙҙең сафтарҙа көтәбеҙ.

**Айһылыу:** Уҡытыусы матур итеп кейенергә лә тейеш. Шуның өсөн уҡытыусының тегенсе оҫталығы ла булһа, икеләтә яҡшы. Ошо ике һөнәргә лә эйә булғыҙ килһә, беҙҙең колледжға рәхим итегеҙ!

**Миңлегөл:** Шундай ҡыҙыҡлы ысынбарлыҡ бар: балалары күп булған ата-әсәләр бер ваҡытта ла ҡартаймай, сөнки улар һәр балаһы менән бергә балалар баҡсаһына йөрөй, бер нисә тапҡыр беренсе синыфҡа бара, бер нисә тапҡыр мәктәп тамамлай. Балалар баҡсаһында эшләү ҙә ошо ысынбарлыҡҡа тап килә: һөйләшә лә белмәгән балаларҙы ҡабул итеп алып, уларҙы һөйләшергә, ныҡлап атларға, уларға донъяны танып белергә өйрәтәһең. Улар менән шатланаһың, улар менән бергә көләһең, илайһың. Ғөмүмән, төрлө сүрәткә инәһең - иң мөһиме, бала күҙҙәрендә шатлыҡ нурҙары балҡыһын. Әгәр һәр саҡ бала күңелле, бала йәнле булып, донъяға саф бала күҙҙәре менән баҡырға теләһәгеҙ - тәрбиәсе һөнәре һеҙҙең өсөн.

▸ **Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр, тигән Достоевский. Һуңғы ваҡытта был һүҙҙәрҙе тура мәғәнәлә генә ҡабул итә башланылар. Һеҙҙенсә, нимә ул матурлыҡ һәм донъяны ҡотҡарырлыҡ матурлыҡ ниндәй булырға тейеш?**

**Зилә:** Яҙ көнө донъяның, тәбиғәттең уяныуы - ул матурлыҡ. Ләкин яҙ етеү менән ҡар аҫтынан бөтөн булған бысраҡ та килеп сыға һәм баяғы тәбиғи матурлыҡты бәҫһеҙләндерә төшә. Кешеләр йөрөгән, йәшәгән урында үҙ артынан сүп-сар ҡалдырмаһа, үҙен тәртипкә өйрәтһә, бындай бысраҡтар, йәмһеҙ күренештәр булмаҫ ине. Бына ошондай матурлыҡҡа өлгәшеү тураһында хыялланам.

**Лилиә:** Матурлыҡ - ул тәрбиә. Тап ошондай матурлыҡҡа уҡытыусылар нигеҙ һала. Был нигеҙҙе күркәм ҡылыҡтар ғына түгел, ә Ватанға, тыуған ергә, туған телгә, рөрөф-ғәҙәттәргә, йолаларға, менталитетҡа һөйөү ҙә тәшкил итә. Кеше ошо сифаттарға эйә булғанда ғына матур була һәм ошо матурлыҡ донъяны ҡотҡара, тип уйлайым.

**Айһылыу:** Матурлыҡ - ул бөтөн донъяны, тыуған илеңде, тыуған ереңде яратыу, кешеләрҙең бер-береһенә ихтирамлы, иғтибарлы мөнәсәбәттә булыуы. Әлбиттә, был яратыу һәм мөнәсәбәттәр яһалма түгел, ә ысын күңелдән, ихлас булырға тейеш.

**Миңлегөл:** Кешенең иң тәүҙә күңеле матур булырға тейеш. Күңеле матур, күңеле таҙа кеше тәү сиратта үҙен дә, башҡаларҙы ла, шулай уҡ үҙе йәшәгән ерҙе, эскән һыуҙы, атлап йөрөгән һуҡмаҡты ла ихтирам итә, ҡәҙерләй, уларҙың матур булыуын теләй. Тимәк, ул хатта бер үҙе генә булғанда ла сүп-сарын, бысрағын ергә ташлап китмәйәсәк. Күңеле таҙа кеше кемгәләр эйәреп кенә ҡулына һыра, тәмәке алмаясаҡ...

▸ **Төрлө төбәктәрҙән йыйылһаҡ та, һәр кемдең яҙмышы Өфө менән бәйле. Баш ҡалала йәнегеҙҙе иң әрнеткәне нимә?**

**Миңлегөл:** Ауылдарҙа ер ҡарҙан асылыу менән йәшел үлән, умырзая баш ҡалҡыта. Өфөлә лә шундай күренеште күрге килә лә бит, тик ҡарҙар иреү менән тирә-яҡта тик сүп-сар күҙгә ташлана. Миненсә, ҡала кешеләренә үҙҙәре йәшәгән ерҙе ҡәҙерләү, йәшеллекте һаҡлау, таҙалыҡҡа, бөхтәлеккә ихтирам етешмәй. Тирә-яҡ таҙа булһа, башҡа етешһеҙлектәр күҙгә лә ташланмаҫ ине һымаҡ.

**Айһылыу:** Ауылда йәшәгән саҡта, Өфө - беҙҙең баш ҡалабыҙ, унда бөтөн нәмә таҙа, ялтырап яталыр, тик һәйбәт кешеләр генә йәшәйҙер, тип уйлай торғайным. Әммә ысынбарлыҡ аяуһыҙ булып сыҡты. Ҡала кешеләренең атлап барғанда ла, машина тәҙрәһенән дә, туҡталышта баҫып торғанда ла үҙ артынан сүп-сарып бәреп ҡалдырыуы аптырата. Тағы шул гәжәпкә ҡалдыра мине: өлкән йәштәге кешеләр урам саттарында хәйер һорап ултыра. Улар, моғайын, ҡасандыр баш ҡаланы үҫтереүгә көсөн һалған, эшләгән, тырышҡан кешеләрҙер, моғайын, уларҙың балалары ла барҙыр. Ниңә улар шундай көнгә төшкән икән, тим дә тетрәнәм.

**Зилә:** Транспортта оло инәй-бабайҙар баҫып торғанда, йәштәрҙең иҫе лә китмәй ултырып барыуын бер нисек тә аңлай ҙа, ҡабул да итә алмайым. Йәштәрҙең ололарға иғтибарһыҙ булыуы, тәкәбберлегә аптырата. Әйтерһең дә, ҡартлыҡ уларға килмәйәсәк, уларҙы урап үтәсәк...

**Лилиә:** Күптән түгел Сәғүд Ғәрәбстанындағы ғаилә дуҫтарыбыҙ Өфөгә килеп китте һәм уларға баш ҡала, бигерәк тә Салауат Юлаев һәйкәле бик ныҡ оҡшаны. Өфөнөң үҙеген хатта Мәскәү менән бер рәткә ҡуйырға мөмкин, тинеләр. Тотош республика буйынса йөрөттөк үҙҙәрен. Башҡортостандың тәбиғәтен күргәс, "Беҙ, моғайын, ожмахҡа килеп эләктек, ожмах, моғайын, тап ошондайҙыр", тинеләр. Ысынлап та, беҙ, бәлки, ожмахтың үҙендә йәшәйбеҙҙер, әммә быны үҙебеҙ генә аңлап еткермәйбеҙҙер. Һуңғы йылдарҙа баш ҡалала күп төҙөлөш эштәре атҡарыла. Тик нимә генә күңелдә ҡыра: бик күп мәҙәниәт усаҡтары бар, әммә унда йәштәр йөрөмәй...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ваҡыт БПДУ-ның ҡыҙыл дипломға тамамлаған йәш коллегам асылып китеп: "Бөгөнгө аҡылым булһа, мин ошо ваҡыт эсендә барлыҡ эшсе һөнәрҙәрен үҙләштерер, уның ҡарауы, нимәгә тотонһам - шуны эшләр, минән дә бай кеше булмаҫ ине", - тигәйне. Ысынлап та, йәштәрҙең күпселеге (барыһы ла тимәйем) юғары уҡыу йортонан күҙҙәренә шоры кейҙерелгән аттар кеүек булып сыға: үҙенең белеме алған өлкәһен белә, ә саҡ ҡына "теманан ситкә" китһәң, аптырай ҙа ҡала. Ә уҡыу йылдарында алдан күрә белгәндәр һәр ваҡыт үҙенә запаска бер-ике юл ҡалдыра: әгәр төп һөнәр буйынса эш булмаһа, өҫтәмә профиль буйынса эш табырға мөмкин. Шуға ла 1-се Өфө киң профилле профессиональ колледж миҫалында барлыҡ һөнәрҙәрҙең дә яҡшы булыуына, урын кешене биҙәмәй, ә кеше урынды биҙәй икәненә ишара яһарға тырыштыҡ та инде. Бары тик өлгәшелгәндәр менән туҡтап ҡалмаҫҡа, ә юлыңды артабан дауам итергә, үҙеңде яһалма сиктәргә ҡыуалап индермәҫкә, ә шорыларҙан арынып, тормошҡа киңерәк ҡараш ташларға һәм киңерәк фекерләргә генә кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ШАҢДАУ*

# ИРЕККӘ ӘЙҘӘҮСЕЛӘР...

## ҡыу ағас һынында була алмай



**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 16-сы һанында Салауат Юлаевҡа арналған һәйкәл-стела эскизын күреп, башҡа ватандаштарыбыҙҙың сығыштарын уҡып, эскиз авторы Әмир Сафиндың яуап һүҙҙәре менән танышҡас, миндә лә ҡайһы бер фекерҙәр барлыҡҡа килде.**

Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫешкән урында һәйкәл-стела төҙөү бик тә урынлы һәм ваҡытлы күтәрелгән мәсьәлә, уны барлыҡ республика халҡы хуплаясаҡ. Сөнки Өфөнөң "көньяҡ ҡапҡаһы" аша сит илдәрҙән, сит төбәктәрҙән, үҙебеҙҙең республика райондары һәм ҡалаларынан бик күп ҡунаҡтар килеп инә баш ҡалаға. Уларҙы милли батырыбыҙ һыны сәләмләп, ҡаршы алып торһа, бик яҡшы буласаҡ. Шуға ла был стела урынлаштырыласаҡ урынды һайлағанда ла, стела эскизы буйынса ла халҡыбыҙ фекере иҫәпкә алынырға тейеш. Был - бер. Икенсенән, бөйөк скульптор Тавасиев кеүек үк Башҡортостанды, уның халҡын, бигерәк тә башҡорттарҙы ысын күңелдән хөрмәт иткән, Салауат Юлаевтың рухын, Пугачев яуындағы ролен тәрән аңлаған, тарихты белгән, киләсәккә өмөт менән ҡараған авторҙар ғына атҡарырға тейеш был эште. Өсөнсөнән, бындай мәртәбәле сара тураһында киң йәмәғәтселек араһында фекер алышыуҙар ойоштторорға, профессиональ скульптура менән шөғөлләнеүселәр араһында конкурс үткәрергә кәрәк ине бит. Ә беҙ ул проект тураһында "Киске Өфө" гәзитен уҡып ҡына белдек, хатта башҡа гәзиттәрҙә мәғлүмәт тә булманы шикелле.

Ағиҙел ярындағы Салауат һәйкәле ни өсөн һәр милләт кешеһенең күңеленә хуш килә? Сөнки унда тарихи дөрөҫлөк тә, киләсәккә әйҙәү ҙә, авторҙың үҙ геройын тәрән һөйөүе лә сағыла. Был һәйкәл кешеләр күңелендә тик изге тойғолар уята. Ошо юҫыҡтан ҡараһаҡ, Әмир Сафин тәҡдим иткән эскиз, ысынлап та, ғәмәлгә яраҡһыҙ. Автор үҙенең эскизында аллегорик алым аша: "Башҡортостан үҙе ҡыу ағас хәлендә. Ул ағасты тирә-яҡтан иҫкән ыжғыр елдәр "Ана ҡолатам, бына ҡолатам" тигән төҫлө йолҡҡолай. Ә "Салауат тоҡомонанбыҙ!" тип яр һалыусы башҡорттар һаман ғорур булып ҡылана", -тигән идея һалғанға оҡшай. Хәйер, автор менән килешмәй ҙә булмай. Ул ошо идеяны, теманы күтәреп, башҡорттарҙы, хатта барлыҡ республика халҡын уяу булырға өндәй, миненсә. Эйе, ғорурланырға тейешбеҙ, әлбиттә, милләтебеҙ тарихы менән дә, республикабыҙ менән дә, шәхестәребеҙ, батырҙарыбыҙ менән дә. Әммә был ғорурлыҡтың нигеҙе ныҡ булырға тейеш бит. Ә беҙ бөгөн ниндәй хәлдәбеҙ һуң? Халҡыбыҙҙың күңел төшөнкөлөгө, рухи көрсөк кисереүе оҙаҡҡараҡ һуҙылды түгелме? Шул арала ерҙәребеҙҙән, урмандарыбыҙ, күлдәребеҙҙән ҡолаҡ ҡағып барабыҙ. Уныһы әле бер хәл. Хатта милләттәштәрҙә аҡрынлап ҡына башҡалар "йөта" икәнен дә тыныс ҡына күҙәтәбеҙ бит. Төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкән күпме башҡорт татар телендә уҡытылып, татарлашты. Татарстандағы күпме башҡорт үҙ тамырҙарынан өҙөлөп, яттар телендә йырлап, һөйләшеп, шул республиканың патриоты булып йәшәй. Республикабыҙҙа йәшәгән татарлашҡан милләттәштәребеҙ ҙә күрше республиканы "үлеп ятып", "Башҡортостан Татарстанға ҡарағанда ярлыраҡ!" тип, мөйөш һайын ризаһыҙлыҡ һүҙҙәре тарата. Татарстандан гастролгә килгән артистар ҙа республиканың теләгән бер ауылына барып инә һәм: "Һеҙ башҡорт түгел, һеҙ татарҙың бер диалекты!" тип иғлан итә, "Башҡорттоң ҡурайҙан башҡа нимәһе бар инде?" тип мыҫҡылларға ла күп һорап тормай. Ни өсөн ундайҙарҙың "гастролдәренә" сик ҡуйылмай?

Батырыбыҙ һынын ҡыу ағас итеп һүрәтләп, Әмир Сафин иптәш беҙҙе үҙ хәлебеҙ тураһында уйланырға мәжбүр итә шулай. Тимәк, авторға рәхмәттән башҡа бер һүҙ ҙә юҡ. Әммә... Әмир Зөфәр улы үҙ эскизы менән нисек кенә ысынбарлыҡты сағылдырырға тырышмаһын, халҡыбыҙҙы өмөтһеҙлеккә дусар итмәйек әле. Башҡортостаныбыҙ короған ағас хәленә ҡалмаҫ, моғайын. Донъя бит - ҡуласа. Ул бөгөн бер төрлө, иртәгә икенсе төрлө әйләнәсәк.

Һәйкәлдәр халыҡтың данлы үткәнен мәңгеләштереп, яҡты киләсәккә саҡырып, ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙырырға тейеш. Әлеге һәйкәл дә Салауат Юлаевтың ҡурҡмаҫ йөрәкле батыр, сәсән, ҡурайсы, иреккә әйҙәүсе икәнен һөйләргә тейеш. Уның хыялдарының тормошҡа ашыуы ла сағылдырылһын, Башҡортостаныбыҙҙы танытып торһон ул. Салауат Юлаевтың берәй шиғырынан өҙөк яҙып ҡуйғанда ла була. Шул саҡта был стела әлеккенең дауамы, Әмир Зөфәр улы әйткәнсә, "өҫтәмә" итеп ҡабул ителәсәк. Булғас, булғас, стела-һәйкәл күркәм булһын инде ул!

**Рәүеф БИКТАШЕВ,**
**ветеран уҡытыусы.**
**Сибай ҡалаһы.**

✓ *Ҡыҫҡаһы, бына шундай һөйләшеү булды һәм битараф бер яҙыусы кәйефемде ҡырҙы. Хәйер, бер ҙә генә лә дөйөмләштергем килмәй. Битарафтар беҙҙекеләр түгел, тим дә тынысландырам үҙемде...*






Бәхеткә, хужа йәш ҡатынды әллә ни оҙаҡ ыҙаламаны, бер аҙ ваҡыттан:

- Зоечка, массаж яһа әле, - тип йомшаҡ ҡына өндәште. Үҙе ҡарттарса көрһөнөп, тамаҡ ҡырып алды ла йөҙтүбән әйләнеп карауатҡа ятты...

Массаж ваҡытында хужаның магнитофонда эротик көй уйнатып ҡуйыуы Зәлифәгә оҡшаманы. Үҙен үртәп, үсекләп, ирештереп торған һымаҡ ҡабул итте ул көйҙө. Шулай ҙа, уныһына ғына түҙергә була икән, тип уйланы һәм был кешенең "хәүефһеҙ" икәнен күреп, эстән генә һөйөндө...

Массаждан һуң бер-нисә минутҡа йоҡлап киткәндәй тойолған Вениамин Петрович кинәт кенә ҡалҡынып:

- Ярай, Зоечка, рәхмәт. Бөгөнгә етеп торор. Миңә әле бер аҙ эшләп алаһы бар, - тине лә кухня аша эш бүлмәһенә йүнәлде. - Ә һин ял ит...

Аҙна буйы көн дә хужаны хеҙмәтләндергән Зәлифә бик шикләнгәйне, әммә, бәхеткә күрә, Вениамин Петрович "хәүефһеҙ" булып сыҡты. Ялы тамамланырға бер көн ҡалғас, бер ҡағыҙға яҙыу яҙып, Зәлифәгә уҡытты ла, запискаһын шундуҡ мейестәге утҡа ырғытты ҡарт. "Зоечка, минең кәрһеҙ икәнемде бер кем дә белергә тейеш түгел. Юғиһә, бик-бик насар буласаҡ", тип янау формаһындараҡ яҙылған был һүҙҙәрҙе уҡып, Зәлифә берсә ғәжәпләнде, берсә ныҡ ҡурҡыуға ҡалды. Тик ни өсөн улай икәнен ҡапыл да аңламаны.

Шул көндән алып биш-алты ай самаһы үтеп тә китте. Көн дә гимнастика, һәр төрлө күнегеүҙәр менән үҙаллы шөғөлләнгән Зәлифәне бер кем дә борсоманы. Ул тик Маша һәм Олег менән генә аралашты.

-Ҡайһы саҡ йылына бер генә килә ул бында, - тип яҙҙы Маша Зәлифә һораша башлағас. - Әйткәндәй, был йортта һис бер нәмә менән ҡыҙыҡһынмаҫҡа, белгәнеңде һөйләмәҫкә тырыш. Һинән алда бында хәс тә һинең кеүек бер йәш ҡыҙ эшләгәйне. Сәстәре лә һинеке һымаҡ оҙон, матур ине. Әммә артыҡ күп һөйләргә яратты. Бер көн был ҡыҙ таң атҡансы юҡ булды. Уның ҡайҙа киткәнен берәү ҙә белмәне. Беҙҙән дә килеп һорашып йөҙәтмәнеләр. Тик һуңынан "артыҡ күп белеүе һәм оҙон теле арҡаһында" китте, тигән имеш-мимештәр генә йөрөнө.

Бынан һуң Зәлифә телевизорҙы йышыраҡ ҡарай башланы. Бөйөк Ильич һыҙған юлдан яңылыштырмай, туп-тура коммунизмдың үҙенә табан совет халҡын етәкләп алып барыусы һөйөклө генераль сәркәтипте һәм уның иң яҡындары менән бер рәттән тиерлек Вениамин Петровичты ла йыш ҡына күрһәтәләр. Телевизор экранынан ул бик тә күрмәлекле, көслө кеше һымаҡ, ун-ун биш йәшкә йәшерәк тә күренә. Тауышы ла көр.

Бер мәл телевидение дикторы барлыҡ радио һәм телевизорҙарҙы асып ҡуйырға һәм үтә мөһим хөкүмәт тапшырыуын тыңларға ҡушты. Маша ла бүлмәлә ине. Бер аҙҙан диктор йөҙөн етди, ҡайғылы итеп, ниндәйҙер шомло тауыш менән һөйләй башланы: "... йылдың ...айында, оҙаҡ һәм ҡаты ауырыуҙан һуң, ҙур сәйәси эшмәкәр, ялҡынлы коммунист, тоғро ленинсы, ... рәйесе, иптәш ... донъя ҡуйҙы. Әммә оло юғалтыу кисергән совет халҡының коммунистик рухы мәңге ҡаҡшамаҫ..."

Маша күҙ йәштәрен тыя алмай, алъяпҡысы менән битен ҡаплап, кухняға сығып китте. Машаның илауына ғәжәпләнде Зәлифә. Тағы ике-өс көндән мәйет ерләү церемонияһын телевизорҙан әллә нисә тапҡыр күрһәттеләр. Ерләүселәр араһында Вениамин Петрович та күренгеләп ҡалды. Ә дачалағы тормош һаман да элеккесә барҙы.

* * *

Элекке сәркәтип урынына яңыһын ултырттылар. Тәү тапҡыр телевизор экранынан күренгәс тә, был яңы, әммә шулай уҡ үтә ҡарт етәксенең ниндәйҙер ауыр сир менән интеккәнен фаразлауы ҡатмарлы түгел ине. Ысынлап та, ул әллә ни оҙаҡ ыҙаламай ғына теге донъяға китте. Уның урынына килгән сираттағыһы ең һыҙғанып үҙ эшенә керешкәнгә оҡшаған, буғай. Тағы бер нисә ай үтеп китте. Тик берәү ҙә килеп Зәлифәне иреккә әйҙәмәне. Шулай ҙа уның менән бик-бик ентекләп инструктаж үткәргәндән һуң, Маша менән бергә ҡалаға сығып йөрөргә рөхсәт иттеләр. Әлеге ҡәһәрле фотомонтаж хаҡында ла иҫкәртеп китергә онотманы Олег. Әммә, ысынбарлыҡта, Зәлифә иректә түгел ине. Ҡайҙа ғына барһа ла үҙенең артынан йәшерен рәүештә күҙәтеп йөрөгәндәрен һиҙә. Тик һиҙгәнен белдермәй.

Яңы сәркәтип тә, нишләптер, оҙаҡламай фани донъяны ташлап китте. Тәхеткә йәшерәк дүртенсеһе килде. Өмөтһөҙ - шайтан, тигәндәй, әҙәм балаһы тере саҡта һәр ваҡыт нимәгәлер өмөт итә. Иреккә сығыу өмөтө бөтөнләйгә тиерлек өҙөлөп барған Зәлифәнең ышанысы йәш сәркәтип власть башына килгәс, тағы уяна бирҙе. Әйе, уяна ғына бирҙе. Күтәреп һуғып, донъяһына төкөрөп ҡайтып китергә лә уйлап ҡуйғыланы ҡайсаҡ. Әммә имен-һау өйөнә ҡайтып етеренә тағы икеләнде. Һәр кешелә була торған тәбиғи теләк - был донъяла йәшәү теләге Зәлифәлә лә бик-бик көслө. Һирәк булһа ла, үҙенең "ал да гөл" тормошон һүрәтләп, өйөнә хат та яҙғылап торҙо.

"Иреклe әсир" тормошо күпмелер ваҡыт шулай тыныс ҡына барҙы. Әммә һәр төрлө мажараларға бай яҙмышлы Зәлифәнең ошо тормошонда тағы ла бер тетрәндергес хәл булды. Бер көн, ниндәйҙер сираттағы көсөргәнешле эштән һуң кәйефе шаҡтай төшкән Вениамин Петрович дачаһына килде. Ғәҙәттәгесә, уны хеҙмәтләндерергә тотондолар. Әммә яратҡан массажынан һуң йоҡлап киткән ҡарт башҡаса уянманы. Уянманы, сөнки ул, үҙенең йәшәү ваҡытын тултырып, баҡыйлыҡҡа күскәйне.

Тейешле органдарҙан килеп, әллә күпме һорашып, әллә күпме анализдар алып, Зәлифәне аҙ этләтмәнеләр. Бәхеткә, Вениамин Петровичтың үлем сәбәбенә экспертиза "...смерть наступила по причине острой сердечной недостаточности..." тигән һығымта яһаны.

Йәш сәркәтиптең "гласность", "демократия", "плюрализм" һымаҡ сәйәсәте модаға ингән саҡ ине был. Иркенләп ҡанаттарын йәйә башлаған журналистар киң мәғлүмәт сараларында хатта ҙур ғына хөкүмәт кешеләренең дә әле берәһен, әле икенсеһен ҡыйыу ғына тәнҡитләргә тотондо. Ә Вениамин Петровичтың үлемен улар икенсерәк итеп һөйләне. Йәнәһе, ул компартияның аҡсаһына һалынған дачаһында йәш һөйәркәһе менән булған саҡта саманан тыш физик көсөргәнеү арҡаһында йөрәк өйәнәгенән үлгән...

"Суртан үҙе үлһә лә теше үлмәй", тигәндәй, үҙгәртеп ҡороуҙар башланыуға ҡарамаҫтан, күп кенә дәүләт органдары бер ни тиклем ваҡыт үҙ эштәрен ифрат та төҙөк, яҡшы итеп алып барҙы. Яңы генсек уларҙы үҙгәртеп ҡороп өлгөрмәгәйне әле. Бәлки - ошо, ә бәлки, икенсе берәй сәбәп менәндер, тағы бер-нисә ай буйы Зәлифәне һаман да шымсылар күҙәтеүҙе дауам итте. Бәхеткә, Зәлифәнең артынан ҡалышмай йөрөгән "күләгәләре" лә бер заман юғалды. Улар менән бергә Олег та кинәт күҙ уңынан юҡ булды. Уға ниндәйҙер кимәлдә өйрәнеп тә киткән Зәлифә әллә нисә тапҡыр шылтыратып, яуап ишетә алманы. Һөйләшкеһе килгәнлектән шылтыратманы ул Олегка! Юҡ! Олегтың ҡайҙа икәнлеген хатта Маша апай ҙа белмәй. Ул барҙа һыуытҡыс һәр саҡ ваҡытында аҙыҡ-түлек менән тулыландырылып тора ине. Хәҙер Зәлифә магазинға үҙе йөрөй. Элек Олег биргән аҡсаларҙан алай ҙа баш тартмаған икән. Бына хәҙер уларҙың да кәрәге тейҙе.

Ахырҙа, Зәлифәкәй ирektә, буғай... Ысынлап микән? Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне Зәлифә. Сөнки уға, әле булһа, кемдер килеп "һин ирекле" тип әйтмәне. Шулай ҙа ошо аңлайышһыҙ, мәхшәр һымаҡ заманда һин кемгә кәрәкһең? Тиҙерәк бер ҡарарға килә һал, Зәлифәкәй!.. Яңы хужа килмәҫ борон тиҙерәк был тирәнән тай! Китә һал! Мөмкин тиклем алыҫыраҡҡа!

Бер ҡарарға килде Зәлифә. Тик паспорт мәсьәләһе генә уны бер аҙ тотҡарлай. Пропискала ул туҡыу фабрикаһының дөйөм ятағында тора. Унан төшөр өсөн ятаҡтың паспорт өҫтәленә барырға кәрәк. Нисек Замирҙың күҙенә эләкмәй генә йөрөргә? Кемдәндер ҡурҡып йәшәү шундай ныҡ ялҡыткайны ҡыҙыҡайҙы, ни булһа ла булыр, тине лә, үҙенең дөйөм ятағына барырға тәүәккәлләне, бер юлы әхирәттәрен дә күреп китергә ҡарар итте. Ул килгәндә әхирәттәренән Мәймүнә генә урынында ине.

-Уф, Зәлифәкәйем! - тип ҡосаҡлап алды уны тағы ла бер аҙ тулылана биргән Мәймүнә.
- Ниндәй елдәр менән?

-Бына һеҙҙе һағынып киттем дә, күрәйем, тип килеп сыҡтым...

Элекке бүлмәләш әхирәттәре урынында ят ҡыҙҙар йәшәй ине. Мәймүнәнән Сәлимә менән Гөлбәзир тураһында һораштырҙы. Сәлимә тормошҡа сыҡҡан, ҡыҙы тыуған, әммә электән хәмергә битараф булмаған Серeжа эсеүгә әүәҫләнеп киткән. Йыш ҡына Сәлимәгә ҡул да күтәрә икән. Мәймүнә һиҙгән "ирҙәр эҫе", ысынлап та, бик әшәке булып сыҡҡан. Әхирәтенең һүҙенә ҡолаҡ һалмағаны өсөн һуңынан бик ныҡ үкенгән Сәлимә. Хәҙер ул иренән айырылып, ҡыҙы менән Өфөгә күсеп киткән. Ә Гөлбәзирҙе, хеҙмәт срогын тултырған морягы - беренсе мөхәббәте килеп, Бөрйәнгә алып ҡайтҡан.

Әхирәттәренең хәлен белешкәс, Мәймүнә һаҡ ҡына:

-Замир тураһында ишеттек, Зәлифәкәй, ҡайғыңды уртаҡлашам. Ә һин бирешмәҫкә тырыш... - тине.

-Нимә ишеттегеҙ Замир тураһында? - тип һораны һүҙҙең ни турала барғанын аңлап етмәгән Зәлифә.

-Нимә тип ни, - тине Мәймүнә бер аҙ ҡыйынһынып, - уның үлем хәбәрен ишеткәнде әйтәм инде...

-Замир?.. Үлгән?..

-Бәй, шулай тип гәзиттә яҙылып сыҡты ла... Әллә буш хәбәрме, Зәлифә?

-Гәзиттә яҙылғас, ысын хәбәрҙер инде ул, Мәймүнә. Тик мин был турала беренсе тапҡыр ишетәм...

-Ә һеҙ Замир менән бергә йәшәмәнегеҙме ни? - тип ғәжәпләнеп, күҙҙәрен ҙурайта биреп һораны Мәймүнә.

-Юҡ, әхирәткәйем, йәшәмәнек. Был хаҡта һуңынан һөйләрмен. Тик һин әйт әле, ниндәйерәк үлем менән үлгән Замир?

-Ғәфү ит, Зәлифә, уның хәләл ефете булараҡ, был хаҡта беләһеңдер тип уйланым. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ниндәйҙер өлкәнең губернаторымы, хакимиәт башлығымы булырға үҙенең кандидатураһын этәрә башлағас, кемдеңдер юлына арҡыры төшкәнме шул... Ҡыҫҡаһы, Ҡара диңгеҙҙә үҙенең яхтаһында ял иткән ваҡытта, яр ситенән снайпер атҡан, имеш, тип яҙылғайны гәзиттә...

- Уф... - тип еңел һуланы Зәлифә һәм әхирәтен ҡосаҡлап, үкһеп-үкһеп иларға кереште. - Мәймүнәкәйем! Мин бер ваҡытта ла ул ҡәбәхәттең хәләл ефете булманым. Әммә минең ҡанымды әҙ эсмәне ул...

**(Дауамы бар).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ЯҘЫУСЫ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

Гәзиттәр һатҡан киоск эргәһендә бер яҙыусыны осраттым. Шәмбе көндө почтальон гәзиттәрҙе өйгә килтермәй ҙә ҡуя, ә мин үҙебеҙҙең башҡорт гәзиттәрен күрмәй түҙә алмайым. Шуға сыҡҡайным киоскыға.

- Өс-дүрт киоскыны урап сыҡтым, "Комсомольская правда"ны тапманым, - тип һүҙ башланы яҙыусы.

- Берәй әҫәрегеҙ баҫылып сыҡҡанмы әллә, тиер инем, һеҙ русса яҙмайһығыҙ, "Комсомольская правда" үҙе лә башҡорт яҙыусылары тураһында баҫмай... - тинем аптырап.

- Ниңә, уҡыйым мин ул гәзитте...- тип мығырҙанды яҙыусы.

- Алла Пугачева һәм башҡа йондоҙҙарҙың шәхси тормошондағы ығы-зығы ҡыҙыҡмы һеҙгә лә? - Шунан яуапты көтмәҫтән өҫтәнем. - Ә башҡортса гәзиттәрҙе һатып алмайһығыҙмы ни?

- Әллә, ни яҙалар һуң улар был юлы? - тине яҙыусы һәм мин һатып алған гәзиттәргә күҙ һалғандай итте.

Ҡыҫҡаһы, бына шундай һөйләшеү булды һәм битараф бер яҙыусы кәйефемде ҡырҙы. Хәйер, бер ҙә генә лә дөйөмләштергем килмәй. Битарафтар беҙҙекеләр түгел, тим дә тынысландырам үҙемде...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ИЖАДХАНА*

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Нәғим НУРҒӘЛИНды үҙ эшенең оҫтаһы һәм, әлбиттә, бик шаян, шуҡ кеше итеп беләбеҙ. Етмәһә, үҙе йырсы, үҙе бейеүсе. Театрҙа эшләй башлаған осоронан алып төрлө жанрҙағы спектаклдәрҙә йөҙгә яҡын роль башҡарып өлгөрөүсе актер ошо көндәрҙә үҙенең алтын юбилейын билдәләй. Үҙенсәлекле башҡорт юморы оҫтаһы Нәғим Нурғәлиндың беҙгә таныш булмаған тағы ниндәй сифаттары, шөғөлдәре бар, ул үҙен нисә йәштә итеп тоя, бөгөнгө милли театр донъяһында уны нимә борсой - әңгәмәбеҙ ошолар тураһында булыр.**

# ИХЛАС ШАЯРТАМ,

## шаяртыуҙарға ихлас ышанам...



### Сәхнәлә үткән сирек быуат

Бәләкәй саҡтан бик шуҡ, шаян булдым. Мәктәптә нимә сыҡһа ла минән сыҡҡанға күрә, уҡытыусылар йыш зарлана торғайны. Бөтәһен дә артымдан эйәртеп алып йөрөнөм, бер концерт, бер спектакль минһеҙ үтмәй ине. Туғыҙынсы класты тамамлағас, райондың "Йәшлек" бейеү ансамблендә бейей башланым. Класс етәксем Хәнифә Ниғмәт ҡыҙы Төркмәнова "Һигеҙенсе класты бөт тә, сәнғәт училищеһына кит, һинән шәп артист сыға", ти торғайны. Ул беҙҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытты, матур шиғырҙар яҙа ине. Мин шәп артист булып киттемме, юҡмы, уныһын әйтә алмайым, әммә уҡығанда ла, ролдәр өҫтөндә эшләгәндә лә ыҙаланып эшләгәнем булманы, барыһы ла үҙенән-үҙе килеп сыға. Өфө дәүләт сәнғәт институтына уҡырға ингәндә әрменән ҡайтып, өйләнеп, колхозда комсорг булып эшләп йөрөй инем инде. Эштән ҡайтып, гәзит уҡып ултырһам, актерҙар бүлегенә студенттар йыйабыҙ, тигән яҙыуға күҙ төштө. Мин Өфөгә сығып киттем һәм уҡырға инеп тә ҡайттым. Үҙе лә сәнғәткә ғашиҡ ҡатыным ҡаршы килмәне. Рәйсә менән дә ауыл клубында "Һыу юлы" тип аталған спектакль ҡуйғанда танышҡайныҡ, уның педагогия институтын тамамлап, эшкә килгән генә сағы ине. Уҡыуҙар башланғас, Әбйәлил менән Өфө араһын тапаным ғына былай, ҡатын, балалар һағындыра, атай-әсәйҙең иҫән сағы. Ҡан тапшырһам, өс көн ял бирәләр, шулай донор булып та кителде. Уның араһында атай-әсәй ауырып киткән, ағайҙар аяғын һындырған, тигән сәбәптәр уйлап табам. Ике йылдан ғына бүлмә алып, ғаиләмде үҙемдең эргәмә алдым. Быйыл 23-сө ижад миҙгелен ябабыҙ, театр сәхнәһендә 25 йылға яҡын ғүмер һиҙелмәй үтеп тә киткән.

### Кешеләргә ихлас ышанам

Театрҙа хеҙмәттәштәрем дә, дуҫтарым-таныштарым да мине шаян кеше тип белә. Кешене шаяртырға ныҡ яратам, саҡ ҡына күңелһеҙләнеп йөрөй башлаһалар, коллегаларҙы йә телефонға йүгертәм, йә тышта атайың, әсәйең көтөп тора, тип сығарып ебәрәм. Эш хаҡы тотҡарланған ваҡыттарҙа, ошо кешеләргә аҡса бирелә, тип, исемлек яҙып элеп китәм. Үҙемдең фамилияны иң беренсе яҙам да, әллә ысынлап бирәләрме икән, тип, шул тирәлә май эргәһендә өйөрөлгән бесәй кеүек йөрөйөм. Аҡса мәсьәләһендә кеше тиҙ ышана бит ул. Бында иң ҡыҙығы шунда: "Ҡыҙҙар, премия була икән, ишеттегеҙме?" - тип шаяртыуым була, ысынлап та премия бирәләр ҙә ҡуялар. Быйыл ғына шундай өс осраҡ булды, бына ул һүҙ көсө тигән ниндәй!

Спектакль барған ваҡытта грим бүлмәһенә инеп, "Тиҙ бул, нимә ҡарап ултыраһың, тиҙерәк сәхнәгә!" тип, актерҙарҙы йүгертеп сәхнәгә сығарҡан мәлдәр ҙә булды. Өйрәнеп тә бөткәндәр инде, үпкәләп бармайҙар, һуңғы ваҡытта үҙем дә әллә ни шаяртмайым. Сөнки театрға миңә алмашҡа йәш, һәләтле, шаян актер Шәһит Хамматов килде, уға ҡарайым да, үҙемдең йәш саҡты иҫкә төшөрәм. Ул йөрөй хәҙер тегендә алдап, бында шаяртып. Ғөмүмән, шаяртыуҙар уйлап эшләнелмәй бит ул, көтмәгәндә кешене осратаһың да, нимәләр әйтәһең дә китәһең, шулай хәтер ҡалдырмаҫлыҡ матур ғына шаярыу килеп сыға.

Үҙем дә кешегә тиҙ ышанам. Быйыл 1 апрель көндө Сара Буранбаева шылтыратып, "Ашҡаҙар" радиоһына тура эфирға саҡырҙы. Мин һуңлап йөрөргә яратмайым, кәм тигәндә 15 минут алдан килеп торҙом. Студияла ҡыҙҙар менән һөйләшеп ултырһам, Сара инде лә, мин бит һине 1 апрель айҡанлы алданым, ти. Нәғимде алдауы, шаяртыуы бер ни тормай, тиҙәр миңең турала, бик ихлас ышанам мин барыһына ла.

### Комедия еңел жанрмы?

Милли йәштәр театры бик үҙенсәлекле театр, ул балалар өсөн дә, йәштәр өсөн дә, ололар өсөн дә спектаклдәр ҡуя. Шуға ла 23 йыл ижади ғүмер эсендә 100-гә яҡын роль башҡарырға насип булды. Ҡайһы бер көндәрҙә ике-өс спектакль, уларҙың бөтәһендә лә төп ролдәрҙе уйнаған ваҡыттар бар ине. Араларынан береһен дә айырып әйтеп булмай, шулай ҙа иң иҫтә ҡалғаны - Гольдониҙың "Ике байға бер Шомбай" комедияһында Шомбай роле булғандыр. Режиссеры Азат Нәҙерғолов ине, бик күңелле итеп эшләнек уны. Роль бит ул шундай нимә - әгәр ҙә ептең осон тотоп ала алһаң, йомғаҡ тағатылып китеп тик бара. Бөтөн шаярыуҙар репетиция барышында сәхнәлә тыуа ине, шул йомғаҡтың осо табылған саҡ булғандыр, күрәһең. Һуңғараҡ Наил Ғәйетбайҙың "Ауылға ҡыҙҙар килде" спектаклендә Әхтәм ролен рәхәтләнеп уйнаным. Унда инде геройымда таныш бер егеттең фиғелен, холҡон күрһәтергә тырыштым, шул тиклем эскерһеҙ, ихлас кеше ине, күрешһәк, уның менән көлмәйенсә һөйләшеп булмай торғайны. Ғәфүр Ҡәйүмовтың "Һинд ҡыҙы" уйынлы, йырлы, бейеүле, сағыу костюмлы комедия булды, халыҡ уны йығылып көлөп ҡарай ине. Әле яңы ғына "Диләфрүзгә дүрт кейәү" (Туфан Миңнуллин) менән Себер тарафтарында йөрөп ҡайттыҡ, халыҡ артыбыҙҙан ҡаланан-ҡалаға йөрөп ҡараны уны. Комик ролдәрҙе күберәк уйнайым, шуға ла берәй драма әҫәрендә мин сәхнәгә сығып күренеү менән халыҡтың ауыҙы йырыла башлай.

Театр сәнғәтендә комедия жанры еңелдәрҙән иҫәпләнмәй. Тамашасыны төрлөсә көлдөрөп була, әммә мин бер ваҡытта ла, көлдөрәм, тип көлдөрмәйем. Бында ихласлыҡ кәрәк, геройҙың ихласлығы, ябайлығы, эскерһеҙлеге көлөргә мәжбүр итһен уны. Арабыҙҙа ла шундай кешеләр күп бит. Халыҡты көлдөрөү өсөн сәхнәгә сығып, әллә нимәһен күрһәтергә әҙер актерҙар бар. Көлкөгә эйәреп, халыҡ ҡул сапҡанға бер үк нәмәне ике-өс тапҡыр ҡабатлаған актерҙар ҙа була. Актерҙа, бигерәк тә комик актерҙа, сама тигән әйбер булырға тейеш. Әгәр ошо алтын урталыҡ булмаһа, ул йәлләү тойғоһо ғына уятасаҡ.

### Актер һынылыш кисерергә тейеш

Һуңғы осорҙа бигерәк еңел әйберҙәр ҡуйыла, урыҫтар әйтмешләй, спектаклдәрҙе штамплау китте. Ситтән режиссерҙар саҡырабыҙ, ә ул йышыраҡ үҙе рәссам, үҙе үк көй авторы, йәиһә, был спектаклде ҡайҙалыр ҡуйған да, бында ла шуны уҡ ҡабатлай. Бындай спектаклдәрҙә актерға үҙ аллы эшләргә ирек бирелмәй, ул күрһәтмәләрҙе үтәүсе генә булып сыға. Бына ошо хәүеф тора алдыбыҙҙа. Мәҫәлән, элек Рифҡәт Исрафиловтар заманында актерҙы һындырыу тигән нәмә бар ине. Бөгөнгө режиссерҙарҙа ул юҡ. Бына минең комик актер тигән амплуам бар, миңә күберәк шундай ролдәр бирәләр. Ролде әүәләп тораһы юҡ, сөнки һин быға тиклем әллә күпме ошондай роль өҫтөндә эшләгәнһең. Ә актерҙы һындырыу кәрәк, юғиһә, ул бер ҡалыпҡа һалынып ала, ә был бер яҡлы ғына үҫешкә килтерә. Был республиканың бөтөн театрҙарында ла күҙәтелә.

Бөгөн репертуар тураһында күп һөйләйбеҙ. Милли драматургияны үҫтереү өсөн бер генә юл бар, миңә ҡалһа. Талантлы йәштәр күп ул, бары тик Мәҙәниәт министрлығы кимәлендә драматургтар өсөн конкурстар үткәрергә кәрәктер. Шул саҡта, бәлки, театр сәхнәһендә беҙ үҙебеҙҙең ерлектә тыуған әҫәрҙәрҙе йышыраҡ күрер инек. Татарстанда был ысул бик популяр, унда театрҙар үҙҙәренең милли авторҙарын йышыраҡ ҡуя, сөнки театр өсөн яҙыусылар бар. Әгәр ҙә шәп кенә премия билдәләһәләр һәм ул ысынлап та лайыҡлы кешегә бирелһә, яҙыусылар дәртләнеп китер ине. Нимә генә тимәйек, йәмғиәт менән аҡса ла идара итә. Бөгөн матди хәлең насар булһа, дауаханаға барып та, балаңды уҡытып та булмай, сөнки дәүләт үҙе беҙҙе ошондай шарттарҙа йәшәтә...

### Олатайым - Ҡыш бабай

Ваҡытында Башҡортостанда булған бар драма театрҙары ла мине үҙҙәренә эшкә саҡырҙы. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академия ансамбленә бейеүсе булып барырға мөмкинлек бар ине, әммә мин бөгөнгө көнгә тиклем Милли йәштәр театрына хыянат иткәнем юҡ. Бында үҫеш өсөн шарттар юҡ, тигән фекер менән һис килешмәйем, киреһенсә, актер булып өлгөрөр өсөн беҙҙең театрҙа эшләп ҡарарға кәрәк. Сөнки балаларҙы ышандырырлыҡ итеп уйнау һәләтенә һәр кем эйә түгел. Театрҙы аҡ ҡағыҙҙан яҙа башланыҡ, тарихҡа ла шулай инеп ҡалдыҡ. Үҙ театрыңа тоғролоҡ тигән әйбер ҙә барҙыр. Беренсе көндән алып бергә эшләгән дуҫтар бында, күптәре театрҙан китте, инде был донъяла булмағандары ла бар. Дуҫ һәм бер-береһенә тоғро коллектив эшләй бында, башҡа ижади коллективтарға хас булған кире күренештәр - бер-береңде күрә алмау, ғәйбәт таратыу, көнләшеү Милли йәштәр театрына хас түгел. Тыуған көндәр булһынмы, балалар тыуһынмы, коллектив менән бергәләп билдәләйбеҙ. Кешенең ярты ғүмере эштә үтә, әгәр ҙә бер-береңде яратмаһаң, эшкә йөрөүеңдән ни мәғәнә.

Әкиәттәрҙе бик яратып уйнайым. Ейәнсәрем әле бәләкәй, әммә биш йәшлек ейәнем Ғимран Дүрткүҙ ("Ауыл эте Аҡбай"), Лимон ("Чиполлино") булып кейенеп, уйнап йөрөгән олатаһының эше шулай икәнен аңлап ҡабул итә. Бер ваҡыт ул йөрөгән балалар баҡсаһында Яңы йыл байрамына Ҡыш бабай итеп саҡырҙылар. Ейәнемдең төркөмө сыҡты, был миңә ҡарай ҙа, уйлап тора. Аҙаҡтан "Улым, таныныңмы һуң?" тием. "Башта танымағайным, аҙаҡ танынын", ти. Танығанлығын тойғайным инде, сөнки шиғыр һөйләгәндә лә, бейегәндә лә үҙен иркен тота был, сөнки олатаһы тора ла инде эргәһендә. Балаңдың балаһы балдан татлы, уны татымаған кеше генә аңламай. Йыш осрашабыҙ, ныҡ итеп шаярабыҙ, уйнайбыҙ уның менән. Һеңлеһе тыуғас, минең бала сағымды хәтерләтә башланы, уны көлдөрәм, тип, нимәләр генә ҡыландырмай.

Ҡыҙым менән кейәүем журналист. Бына улым Искәндәр актер һөнәрен һайланы, быны беҙ белмәй ҙә ҡалдыҡ, тиерлек, һәр кем балаһын юрист, иҡтисадсы итеп күргеһе килә бит инде. Ә ул актер булырға хәл итте, Мәскәүҙә Щепкин исемендәге Юғары театр институтын тамамлап, театрҙа эшләп йөрөй, бик рухлы егет.

### Күңел матурлығы мөһимерәк

Яңыраҡ бер тапшырыу ҡарағайным, баҡтиһәң, кешенең биологик йәше була икән. 50 йәшлек түбәгә етһәм дә, бына мин үҙемде 30 йәштән дә олораҡ тоймайым. Унан һуң, ғүмер оҙайлығы арта, милләт йәшәрә, элек 45-50 йәшлек ағай-апайҙар ныҡ оло кеүек күренһәләр, хәҙер кеше күпкә йәшерәк. Шулай ҙа сәләмәтлеккә зыян килмәһен, күңел йәш ҡалһын, тиһәң, йөрәгеңдә бысраҡ йөрөтмәү мөһим. Әгәр кешене ғәфү итә белмәйһең, кенәсел икәнһең, йәғни, эстән саф булмаһаң, тыштан нисек йәш, матур булаһың? Бында көн һайын гимнастика яһау ҙа, дөрөҫ туҡланыу ҙа артыҡ файҙа килтермәйәсәк. Бер аҡһаҡал әйткән бит әле, кешегә насар һүҙ әйтһәң, үпкәләһәң, тоҡҡа серегән картуф тултыра бар һәм үҙең менән йөрөт. Тоҡтағы картуф нығыраҡ боҙолған һайын, уның насар еҫе тирә-йүнгә таралған кеүек, күңел дә бысраҡлыҡтан еҫләнә башлай. Кешегә үс тотмайым, үпкәләһәм дә, тиҙ онотам, эштә бәхәсләшеп киткән осраҡтар була, әлбиттә, сөнки спектакль эшләгәндә бәхәсһеҙ булмай. Дөрөҫлөк бәхәстә ярала, тигән бит бер аҡыллы кеше.

Ир-егет һөнәрҙәренән техникаға әүәҫмен. Атайым да механик булып эшләне. Мәктәптә уҡыған сағымда уҡ ауылдаштар мотобысҡыларҙы, мотоциклдарҙы ремонтлатырға миңә алып киләләр ине, 8-се класты бөткәс, каникулда тракторҙа эшләй инем. Бәләкәйҙән спорт яраттым, бер ҙә арымай торғайным, хатта әрмелә хеҙмәт иткәндә быға аптырай инеләр. Ауылда спорт менән шөғөлләнергә теләк булһа ла, мөмкинлектәр юҡ, шуға ла Өфөгә килгәс, ныҡлап һигеҙ йыл каратэ менән шөғөлләндем, бала саҡ теләге көслө булғандыр инде. Гитарала уйнарға, йырларға, шиғырҙар, ғөмүмән, художестволы әҙәбиәт уҡырға яратам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нәғим Нурғәлиндың ижады тураһында һөйләгәндә уға тамашасы тарафынан йәбештерелгән "комик актер" тигән амплуаһынан да ҙурыраҡ баһа юҡтыр ул барыбер. Халыҡ милли юморға хас ябайлыҡты, тәбиғилекте, фәлсәфәне нескә тоя һәм ошондай шаярыуҙы ғына ҡабул итә, тимәк, ул ысын мәғәнәһендә халыҡсан актер. Сәхнәлә уйнамай, йәшәй беләһең икән, артист кеше өсөн оҫталыҡтың бынан да юғарыраҡ үре булыуы мөмкин микән? Нәғим ағай менән етди итеп етди темаларға һөйләшһәк тә, тормошона, ижадына ниндәйҙер байҡау яһарға тырышманыҡ. Ир-егет өсөн 50 йәш йәшме инде ул, әле тәрән кисерештәргә бай ролдәре, ғүмерендә, ныҡлы тылы - ғаиләһендә тағы ла шатлыҡлыраҡ мәлдәре алда булһын. Ә актерҙың юбилейына арналған спектакль көҙ, театрҙың 24-се миҙгеле асылғас ҡуйыласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



## АЛТЫНДАН...
### көмөш биҙәүес яҡшы

■ Алтындан яһалған биҙәүестәр тирегә ышҡылып, нервылар системаһының эшенә кире йоғонто яһай. Канада ғалимдары асыҡлауынса, алтын алҡа-беләҙектәр хистойғоға бирелеп барыусы кешеләргә ауыр депрессия хәленә индереүе ихтимал. Билдәләнеүенсә, ҡиммәтле металл тирегә тәьҫир итеп, нервылар системаһын ҡуҙғытыу хәленә килтерә. Бынан тыш, ул матдәләр алышыныу процесын әкренәйтә, кешелә хәүеф тойғоһо көсәйә, ә психикаһы тотороҡло булмаған кешеләрҙе депрессияға килтерә. Белгестәр биҙәнеү әйберҙәренән бөтөнләй баш тартырға ҡушмай, шулай ҙа уларҙы төнгөлөккә сисеп торорға кәңәш итә. Шулай уҡ алтынды көмөш биҙәүестәргә алыштырыу тағы ла яҡшыраҡ, ти тикшеренеүселәр. Көмөш нервылар системаһына бик ыңғай тәьҫир итә, артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтеү көсөнә лә эйә.

■ Күптәр оҙаҡ итеп йоҡларға ярата. Баҡтиһәң, йоҡо туйғансы йоҡлап алыу кәйефте күтәреп, энергияны арттырып ҡына ҡалмай, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килеүҙән дә һаҡлай икән. Колорадо университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, яҡшы итеп йоҡлау артыҡ килограмдарҙан ҡотҡара. "Йоҡо үҙе ябығыуҙа бер роль уйнамаһа ла, матдәләр алышыныуҙа уның ярҙамы бар. Был асышыбыҙ кешеләргә көн режимына иғтибарлыраҡ булырға булышлыҡ итер, тип уйлайбыҙ", ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Кеннет Райт. Тикшеренеүҙәрҙә 16 сәләмәт, ябыҡ кеше ҡатнаша. Улар ике аҙна буйына университет клиникаһында йәшәй. Тәүге өс көндә тәүлегенә 9 сәғәт йоҡларға рөхсәт бирелә, әммә уларҙың тукланыуының энергетик ҡиммәте иҫәпләнгән нормаға ярашлы ғына була. Ҡалған көндәрҙә ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленә: тәүгеһе тәүлегенә - 5, икенсеһе 9 сәғәт йоҡлай. Ике төркөмгә лә аҙыҡ-түлеккә сикләү ҡуйылмай. Биш көндән һуң асыҡланыуынса, 5 сәғәт йоҡлаусылар энергияны 5 процентҡа күберәк тотона, әммә калорияны ла 6 процентҡа күберәк йыя. Бынан тыш, улар иртән аҙ, кисен күберәк ашай. Билдәле булыуынса, тап киске ашты мул ашау артыҡ ауырлыҡҡа килтерә лә.

■ Сингапур милли университеты һәм Гонконг университетының бер төркөм ғалимдары гел ауыр сумка һөйрәп йөрөүҙең кеше психикаһына тәьҫирен асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, артыҡ ауырлыҡтың депрессияға килтереүе билдәләнгән, йәғни белгестәр сумканың ауырлығы һәм уның хужаһының күңел торошо араһында бәйләнеш барлығын раҫлай алған. Эксперимент барышында психологтар ҡатнашыусыларға билдәле бер ваҡыт эсендә ауыр сумка тотоп йөрөргә ҡушҡан. Унан һуң улар менән был мәсьәләгә ҡағылышлы булмаған темаларға һөйләшкәндәр. Бар ҡатнашыусыларҙың да фекерләүе кире яҡҡа үҙгәргән. Икенсе төрлө әйткәндә, көн һайын ауыр сумка һөйрәп йөрөүселәрҙә ҡараңғы уйҙар йышыраҡ барлыҡҡа килгән. Тик был проблемаға икенсе төрлө ҡарарға мөмкин, ти белгестәр: проблема үҙе түгел, ә беҙҙең уға ҡарашыбыҙ күпкә мөһимерәк. Әгәр ҙә ауыр сумка тотоп китеп барған кеше уға ауыр йөк итеп ҡарамай, күңеллерәк уйҙар уйлап йөрөһә, уның психикаһында кире яҡҡа үҙгәреш тәр булмаясаҡ.

ҺАБАҠТАР

# НАМАҘҒА БАҪЫРҒА...
## иртә лә, һуң да түгел



**Аллаһты бер итеп танып та, исламдың хаҡлығына иманып та, "Бер аҙ ологайғас, көнитмеш мәшәҡәттәре кәмегәс, донъя бөтәйгәс, балалар күҙле-башлы булғас, пенсияға сыҡҡас, намаҙ уҡыясаҡмын", тигәндәргә бер һабаҡ булһын тип яҙам был ваҡиға тураһында.**

Киске алты ине. Телефон шылтыраны. Университетта бергә уҡыған ҡыҙҙың борсоулы тауышы ишетелә: "Илүзәне таба алмайҙар, телефонын алмай, туғандары борсола". "Телефонының зарядкаһы бөткәндер, йә һүндереп ҡуйғандыр, минең дә аҙна буйы элемтәлә булмаған саҡтарым була", тип йыуатҡан булам курсташымды. Көндә шикелле, бер аҙ тынысланды, "Шулай ҙа ятаҡханаға барып, белешеп кенә ҡайт әле", тип, трубканы һалды.

Хәйерлегә юрайым, башымдан теләнә ниндәй уйҙарҙы ҡыуырға тырышып, үҙ эшем менән булыуҙы дауам итәм. Бер аҙҙан тағы телефон шылтырай. Илүзәнең ағаһы Рәис шылтырата. "Бөгөн Илүзә көнө буйы телефонын алмай. Хәбәрҙар түгелһеңме? Ятаҡханаға ла ҡайтмаған, тиҙәр. Әле үҙем бушамайым, барып ҡына әйлән әле", ти. Бер мәлгә күңелдә шомлоҡ баҫа, насар уйҙарҙы ауыҙыҡлап булмай. Бер уҡ хәбәрҙе икенсе кеше әйткәс, тыныс ҡына ҡалып булмай бит, ятаҡханаға барырға йыйынам. Шул саҡ тағы телефон шылтырай. Илүзәнең икенсе ағаһы. Шул уҡ һорауҙар, үтенестәр. Үҙе ауылда икән. Һеңлеһе кисәнән бирле телефонын алмай, ти. "Ятаҡханаға барып, белешеп кенә кил әле, зинһар", ти. Борсолоуым тағы ла көсәйә.

Илүзә минең иптәшемдең, йәғни Рәистең ике туған һеңлеһе. Мин уҡыған төркөмдә мосолман ҡыҙҙары булыуын ишеткәс, Рәис һеңлеһен дә улар менән таныштырыуҙы

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# РӘЖӘБ АЙЫ БАШЛАНА

**Рәжәб, шәғбән һәм рамаҙан айҙары - Аллаһы Тәғәләнең оло ниғмәте. Был айҙарҙа изге эштәр, ғибәҙәттәр өсөн ҙур әжер бирелә һәм тәүбәгә килеүселәрҙең гонаһтары ярлыҡана. Мөьмингә ошо изге өс айҙың бәрәкәтен мәңгелек тормош өсөн ҡулланыу мөмкинлеге бирелә. Бер хәҙистә: "Әгәр үлем алдынан үҙегеҙгә именлек, тыныслыҡ һәм был донъянан иманлы, мосолман булып китеүегеҙҙе теләһәгеҙ, был айҙарҙы хөрмәт итегеҙ, ураҙа тотоғоҙ, хаталарығыҙ, гонаһтарығыҙ өсөн ғәфү үтенегеҙ", - тип әйтелә.**

Был айҙарҙың тәүгеһе - рәжәб. Ул быйыл 11 майҙа башлана . Хәҙистәргә ярашлы, рәжәб айында изгелек өсөн әжер һәм насарлыҡ өсөн яза 70 тапҡырға арттырыла. Хисаплап бөтмәҫлек ниғмәттәр, сауаптар ебәрелгәне өсөн дә ул "Аллаһы Тәғәлә айы" тип йөрөтөлә. Бигерәк тә айҙың беренсе, ун бишенсе һәм егерме етенсе төндәре һәм көндәре ҡиммәтле. Был төндәрҙә ғибәҙәттә үткәреү хуплана. Хәҙистә: "Кем дә кем рәжәбтең беренсе төнөн терелтә (ғибәҙәттәр, доғалар менән), шуның йәне тәне үлгәс тә үлмәйәсәк; Аллаһы Тәғәлә уны изгелеге менән ҡойондора һәм ул гонаһтарынынан таҙарынып, яңы тыуған бала шикелле булып ҡаласаҡ. Хисап көнөндә тамуҡҡа барған бик күп гонаһлыларҙы упҡындан алып ҡалыу шәфәғәтен аласаҡ".

Шулай уҡ был айҙа күп итеп "Ихлас" сүрәһен уҡырға "Лә иләһә илләллаһ" зекерен әйтергә кәрәк. Бер ҡатын хаҡында фәһемле хикәйәт бар. Ул һәр рәжәб "Әл Аҡса" мәсетендә 12000 тапҡыр "Ихлас" сүрәһен уҡый. Башына йөн тукыма ябынып йөрөргә ярата. Был ҡатын ауырып киткәс, улына үҙе мәрхүм булғандан һуң ошо туҡыма менән бергә ерләргә васыят әйтә. Вафат булғас, ул кәфенгә урап ерләнә. Шул төндә улы төшөндә әсәһен күрә. Әсәһе: "Мин һинең менән ҡәнәғәт түгелмен, ни өсөн васыятымды үтәмәнең?" - ти. Йоҡонан торғас та, улы ошо туҡыманы алып, зыяратҡа йүнәлә. Ҡәберҙе ҡаҙғас, уның буш икәнлеген күреп, юғалып ҡала. Ошо мәл: "Белмәнеңме ни, рәжәб айында Минең өсөн ураҙа тотҡандарҙы ҡәберҙә яңғыҙ ҡалдырмайым",- тигән тауыш ишетә.

Рәжәб айының беренсе йома төнөндә - Рәғаиб кисендә (16 майҙың 17 май кисе) бөтә фәрештәләр ошо айҙа ураҙа тотоусыларҙың гонаһтары ғәфү ителеүен теләп, доға уҡыйҙар. Был кис - Аллаһы Тәғәләнең үҙ ҡулдары ҡылған доғаларҙы һәм тәүбәләрҙе күпләп-күпләп ҡабул итә торған мәле.

Сәүбән исемле сәхәбә бәйән итә: "Зыярат янынан Бәйғәмбәр менән үтеп барғанда, ул бик ныҡ илай башланы һәм доға уҡыны. Мин уның ни өсөн илауы менән ҡыҙыҡһындым. Бәйғәмбәребеҙ: "Эй, Сәүбән, был кешеләр ҡәбер ғазаптарына дусар ителгәндәр, мин Аллаһы Тәғәләнән, уларҙың ғазаптарын еңеләйтеүен һорап, доға уҡыным, - тине лә, өҫтәп ҡуйҙы. - Әгәр Рәжәб айының бер төнөн генә булһа ла ғибәҙәттә үткәрһәләр, ҡәбер ғазаптарынан ҡотолорҙар ине". Мин унан "Бер көн ураҙа тотоу һәм төндө ғибәҙәттә үткәреү уттан һаҡлаймы?" тип һорай ҡуйҙым. Бәйғәмбәребеҙ: "Мине хәҡиҡәт менән ебәреүсе исеменән ант итәм, ошо айҙа, таҙа ниәт менән Раббыһы өсөн бер көн генә булһа ла ураҙа тотоусы һәм бер төн ғибәҙәт ҡылыусы мосолман ирҙәре һәм ҡатындары - йыл дауамында ураҙа тотҡан һәм ғибәҙәттә үткәргән шикелле әжер аласаҡ".

Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһү): "Ҡиәмәт көнөндә, бәйғәмбәрҙәрҙән, уларҙың яҡындарынан һәм рәжәб, шәғбән, рамаҙан айҙарында ураҙа тотоусыларҙан башҡалар бөтәһе лә көслә һыуһау һәм асығыу тояса", -тип әйткән.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Учалы районы Илтабан ауылында йәшәүсе уҡыусыбыҙ Мәүлиҙә Закирова Рәғаиб кисендә үҙе менән булған бер ваҡиға тураһында яҙып ебәргән:**

**"2012 йыл көсөргәнешле булды бит. Йыл башынан ниндәйҙер хәүеф буласағын һөйләнеләр. Шулай Рәғаиб кисендә ғөсөл ҡойоноп, йәстү намаҙынан һуң төнгө 1-ҙә йоҡларға яттым. Төндә ҡапыл уянып киттем. Сәғәтте ҡарайым. 3-сө киткән, иртәнге намаҙға иртәрәк әле, ятып торайым, тип уйланым. Шул саҡ өй эсе яп-яҡты булып китте. Ҡарашымды яҡтылыҡ килгән яҡҡа йүнәлттем. Ҡояш үҙе ҡып-ҡыҙыл булып янып тора! Йә, Раббым, барыһы ла яҡшы булһын, тимен. Бер аҙҙан яҡтылыҡ юғалды. Аллаһы Тәғәләнең мөғжизәһен күрергә насип булды шулай. Эйе, Раббыбыҙҙың мөғжизәләре күп, беҙ тар аңыбыҙ менән уларҙы аңлап та бөтмәйбеҙ. Һәр көн иртәнге намаҙҙан һуң мәшһүр Зәйнулла бабайыбыҙҙың "Аллаһ хаҡына мәшаллаһ!" тигән һүҙҙәрен ҡабатлайым. Аллаһ ҡына именлек бирә, мәшаллаһ! Аллаһ ҡына яманлыҡтан һаҡлай, мәшаллаһ! Бөтә яҡшылыҡ һәм изгелек тик Аллаһтан ғына, мәшаллаһ! Аллаһтан башҡа һис кемдең көс һәм ҡеүәте юҡ, мәшаллаһ! Ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлай йөрөгөҙ, кешеләр!"**

һорағайны. Бер нисә аҙна элек Илүзәне ҡыҙҙар менән таныштырғайныҡ, ул улар менән дини һабаҡтар ала башлағайны... Башыма яман уйҙар килеүен дауам итә. Уларға тамырланып китергә ирек бирмәһәм дә, ныҡлап йәбеште лә ҡуйҙылар. Бына ятаҡханаға яҡынлашам. Шунда аҙна башындағы һөйләшеү хәтергә төшә. Төркөмдәш ҡыҙҙарҙың береһе: "Илүзә менән етди һөйләшеү булды, ул, Аллаға ышанам, ләкин намаҙ уҡырға, дин талаптарын үтәргә иртәрәктер, тине. Ағаһына әйт әле, инандырырлыҡ итеп һөйләшеп алһын ул да", - тигәйне. "Ярай, әйтермен", тип кенә ҡуйғайным. Ғүмәр (разыяллаһу ғәнһү) хәлифлек иткән осорҙа булған ғибрәтле тарихты хәтергә төшөрәм. "Аҙан ишетелгәс, хәлиф мәсеткә табан йүгергән биш йәшлек баланы күреп ҡала. "Ҡайҙа юл тоттоң?"тип һорай унан хәлиф. Малай "Намаҙға йүгерәм", тип яуап бирә. "Һиңә бит әле намаҙ уҡыу мотлаҡ түгел, иртәрәк", тип өндәшә уға хәлиф. Биш йәшлек малай: "Күрше йортта минең кеүек йәштәге дуҫым бар ине. Ул кисә мәрхүм булып ҡалды. Мин был донъянан Раббыма ғибәҙәт ҡылмайынса китергә теләмәйем", - тип, хәлифте тетрәндерә".

Тукталыштан ятаҡханаға йүнәләм. Яман күренештәр күҙ алдыма килә, уйҙар менән идара итә алмайым, йөрәк дөп-дөп тибә. Хафаланмаҫлыҡ та түгел шул, әле бынды, әле тегендә кеше аңына һыймаҫлыҡ енәйәттәр ҡылыныуы хаҡында ишетеп торабыҙ. Киң мәғлүмәт саралары ла шул енәйәттәр хаҡында кинәнеп һөйләй, рәхәтләнеп беҙҙе ҡурҡыта. Ләкин бер был хәүеф ҡайҙалыр йыраҡта йөрөй, беҙҙе урап үткәндәй тойола...

Ятаҡханаға инәм. Вахта бүлмәһе янында торған милиция хеҙмәткәренең телефоны шылтырай. Ул комендант ҡатындың ҡолағына шым ғына нимәлер әйтә. Комендантның күҙҙәренән йәштәр атылып сыға, тулҡынланып, тотлоға- тотлоға янында торған вахтер ҡатынға шыбырлай:"Тапҡандар, зыярат янындағы соҡорҙа... Икеһе лә үлтерелгән..."

...Был ваҡиға бар Башҡортостанды тетрәткәйне. Баш ҡала вуздарының береһендә уҡыған ике ҡыҙҙың вәхшиҙәрсә үлтерелеүе бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Кеше тигән йән эйәһенең йыртҡыстан да яманыраҡ ҡыланыуы, ғәйепһеҙ ҡыҙҙарҙың йәндәрен ҡыйыуы Өфө кеүек ҙур, күпте күргән ҡала өсөн дә ҡырағай күренеш ине. Хәйер, енәйәтселәрҙе кеше тигән камил йән эйәһе менән тыңҡы сүрәте генә берләштерәләр...

Йәмғиәт, ғәзәттә, ошондай ваҡиғаларҙан һуң бер аҙға һабаҡ ала, фажиғәгә килтерер аҙымдарҙан төңөлә, ниндәйҙер һығымталар яһай, ҡайғыға тарығандарҙың ҡайғыһын уртаҡлаша, ғәйепле ләрҙе ҡәһәрләй. Шунан иһә барыһы ла үҙ яйы менән йәшәй башлай. Ләкин бер хәҡиҡәт хаҡында онотола. Бар нәмә Аллаһы Тәғәлә ихтыярында. Һәр яҙмыш - беҙҙең уҡытыусы. Һәр тарих - оло ғибрәт. Тик кеше генә уларҙан ғибрәт, фәһем алырға ашыҡмай.

Ә был тарихтың ғибрәте "Әле намаҙ уҡырға иртәрәк, бер аҙ олоғайғас килермен дингә", тигән ҡыҙҙың, ошо һүҙҙәрҙән һуң аҙна ла үтмәҫтән, олоғайырға насип булмайынса, фани ғүмере тамамланыуҙан ғибәрәт. Иҫкәртеү был. Уйланырға форсат. Ҡарарҙы Аллаһы Тәғәлә сығара. Ул хәҡиҡәте белә, ғәфү иткән дә, яза биргән дә - Ул. Беҙгә үҙебеҙ һәм мәрхүмдәр өсөн доға ҡылырға ғына ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кисен йоҡларға ятҡанда берәү ҙә иртән уянасағы тураһында тулы ышаныс менән әйтә алмай. Именаман йоҡонан уяныуыбыҙ ҙа кискә тиклем йәшәйәсәгебеҙгә гарантия бирмәй. Айыҡ, сәләмәт тормош алып барыуыбыҙ, спорт менән шөғөлләнеүебеҙ, ғүмеребеҙгә зыян килтерә алырҙай нәмәләрҙән йыраҡ тороуыбыҙ, хатта намаҙ уҡыуыбыҙ ҙа тәҡдиребеҙҙе алға ла, артҡа ла күсермәй. Ләкин ғүмер тигән ошо араУыкта беҙҙе хаҡ юлға йүнәлтәсәк ҡарарҙы үҙебеҙ һайлайбыҙ. Яҙмышыбыҙ өсөн дә үҙебеҙ генә яуаплы. Кеше үҙе теләгәнсә йәшәй, ләкин иң һуңында, һис шикһеҙ, Раббыһы янына ҡайта. Үҙен иң камил йән эйәһе итеп яратыусы һәм һанап бөткөһөҙ ниғмәттәр биреүсе алдында яуап тота. Шул иҫәптән намаҙҙары өсөн дә яуап торорға тура киләсәк уға...**

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Ястребцов фамилиялы Юра

Аҫҡын районына барғандағы мажараларҙан һуң мин баҡый донъя минең менән ҡоштар ярҙамында һөйләшәсәгенә ныҡлы инандым. Ҡанатлылар, уларҙың мәйеттәре, ҡоштарҙың ниндәйҙер өлөшө, ҡаурыйҙар һ.б. миңә һәм яҡындарыма янаған хәүеф хаҡында иҫкәртеп торасаҡ. Әммә тормош мин күҙаллағанға ҡарағанда ла ҡыҙыҡлыраҡ һәм уйҙырмаларға бай булып сыҡты. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң мин күҙгә күренмәҫ көстәрҙең ҡош символын файҙаланып, иҫкәртергә генә түгел, ә һабаҡ бирергә тырышыуын тойҙом.

Быуаттар артылышында беҙ яңы фатирға күсендек. Тәүге мәлдәрҙә күршеләребеҙҙең береһе менән дә тиерлек аралашманыҡ. Тормош иптәшем Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы халыҡ мәғарифының ташландыҡ хәлдәге системаһында тәртип урынлаштырҙы, ә мин, педагогия институтын ҡалдырып, мәктәпкә уҡытырға ҡайттым. Беренсе синыфтағы 16 уҡыусы минең ҡабул итеп алған балаларым булды. Алты йыл дауамында хәләлем менән ирекле рәүештә ҡабул итеп алған бурысыбыҙҙы, алмашына наградалар ҙа, дан да, маҡтау ҙа талап итмәйенсә, еренә еткереп башҡарҙыҡ. Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы был ваҡытта республиканың башҡа субъекттар менән бер рәттән алтынсы тиҫтәлә һөйрәлеүсе мәғариф системаһын беренсе өсәү рәтенә сығарҙы. Уның һөйкөмлөлөгө, Рәсәйҙең беренсе шәхестәре менән һөйләшә белеүе, түҙемлеге һәм ныҡлығы Башҡортостандың бер генә мәғариф министры өлөшөнә төшмәгән данға лайыҡ ине. Ул бер тапҡыр ҙа сит илгә сыҡманы, бер тапҡыр ҙа больничный ҡағыҙы алманы, отпуск һәм ялдың ни икәнен дә белмәне. Әммә мәғариф өлкәһендә һай йөҙгән республика чиновниктары былдай популярлыҡты күтәрә алманы - уны һаттылар. Минең һөйкөмлө тормош иптәшем бынан бер нәмә лә юғалтманы, уның ҡарауы, булдыҡһыҙ кешеләр үҙҙәренең әҫе тәжрибәһендә халыҡ мәғарифы кеүек ауыр йөктө тартыу һәр кемдең дә хәленән килә торған эш түгеллегенә инанды. Хәл-тороштан сығыу өсөн улар сираттағы министрға ярҙам итергә тырышты, әммә бынан бер нәмә лә килеп сыҡманы. Мәрхүмдәрҙе ерләү йолалары өлкәһендә махсуслашыу һәм тотош төбәктәге уҡытыусыларҙың, студенттарҙың, уҡыусыларҙың миллионлаған армияһы менән етәкселек - икеһе ике төрлө нәмә ине. Миңә, Башҡортостандың мәғариф системаһын, уның кадрҙар составын эстән яҡшы белгән кешегә, республиканың яҡын киләсәктәге 20 йылда шул йылдарҙа яулаған рубеждарына ҡайта алмаясағы асыҡ.

Мин дә баш баҫып эшләнем. Иң яҡшы йылдарҙа синыфымда 30 самаһы бала уҡыны, ә гимназияның башҡа кластарында 10-12 бала ғына ине. Береһендә хатта 5-әү генә булды. Минең балаларым ике йылда башланғыс мәктәпте тамамланы, шуға ҡарамаҫтан, урта кластарҙа уңышлы белем алды. Әммә миңә балаларым менән был мәктәптән китергә тура килде. Сөнки Ирек Ғәлимулла улынан һуң директор итеп был вазифаға рухи яҡтан да, һөнәри яҡтан да әҙерлектәре булмаған ҡатын-ҡыҙҙар тәғәйенләнде. Бөгөн минең балаларым урта мәктәпте тамамлай, дөрәҫ, минең ҡатнашлығымдан башҡа. Үҙемдең тынғыһыҙ хеҙмәтем менән уларҙың ике йыл ғүмерен һаҡлап ҡалдым. Минекеләр юғары уҡыу йорттарына ингәндә уларҙың тиҫтерҙәре туғыҙынсы синыфты ғына тамамлаясаҡ.

Мәктәп менән хушлашҡандан һуң ҡабат педагогия университетына ҡайттым һәм тирә-яҡҡа күҙ һалырға, йортомда йәшәгән күршеләремә икенсе күҙлектән ҡарарға мөмкинлек тыуҙы. Шунда күршеләрем араһында ғәҙәти ябай кеше сиктәренә һыймаған берәүҙең булыуына иғтибар иттем: ашау, йоҡо, бәкса һәм автомобиль. Ул бик йыш урамға йөрөргә сыға: уның алдынан эте йүгерә, артынан хужа хәрәкәт итә. Мин бында аңлы рәүештә "хәрәкәт итә" тигән һүҙҙе ҡулланам, сөнки күршем йортта йәшәүсе башҡалар кеүек йөрөмәй, ә кинлектә күсеп йөрөй ине. Был сәйер йәш кеше ҡайһы берҙә миңә билдәле философ Флоренскийҙы хәтерләтте. Уның хаҡында замандаштары, һәр ваҡыт уйҙарына сумып йөрөр ине, тип яҙып ҡалдырған. Өндәшмәҫ, үҙ-үҙенә сумған, ваҡыты-ваҡыты менән ул беҙҙең замандашыбыҙға ҡарағанда Будда ғибәҙәтханаһының послушнигы тойғонон ҡалдырҙы. Хатта ныҡ һыуыҡтарҙа ла баш кейеме киймәне, бары тик сәс көлтәһе генә уны һалҡындан һаҡланы.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

138. Үҙегеҙҙә шәхси үҙанализ гәзәтен булдырығыҙ. Бенджамин Франклин уны индивидуаль һөҙөмтәлелекте күтәреүҙең иң мөһим сараһы тип атаған. Көн һайын үҙанализға йоҡлар алдынан 10 минут бүлегеҙ. Көн дауамында эшләгән барлыҡ яҡшы эштәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, шулай уҡ артабан үҫер өсөн еңеп сығырға кәрәкле ҡаршылыҡтарҙы барлағыҙ. Уңышлы кешеләр башҡаларға ҡарағанда тәрәнерәк фекер йөрөтә. Көндәлек уйланыуҙар тиҙҙән кире сифаттарҙан һәм насар ғәҙәттәрҙән (ғәйбәт һөйләүҙән алып тирә-яҡтағыларҙы һүҙ менән рәнйетеүгә тиклем) арындырыр, аңығыҙҙы көсәйтер. Ныҡышмал күнекмәнән һуң хаталарығыҙ кәмер, ә шәхси власығыҙ тағы ла яңы бейеклеккә күтәрелер.

139. Ҡасандыр уйлап табылған иң һөҙөмтәле һәм йоғонтоло будильник беҙҙең мейебеҙҙә урынлашҡан. Ышанмаһағыҙ, тикшереп ҡарағыҙ:

● Йоҡлар алдынан уңайлы урындыҡта 10 минут ултырығыҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм ҡулдарығыҙҙы тубыҡтарығыҙға һалығыҙ.

● Бер нисә минут тәрән итеп тын алығыҙ (тынды бишкә тиклем һанағанса, тәрән итеп алығыҙ, уны унға тиклем һанағанса тотоп торогоҙ һәм һуңынан тулыһынса сығарығыҙ).

● Түбәндәге команданы үҙегеҙгә 20 тапҡыр ҡабатлағыҙ: "Мин иртән шул ваҡытта (нисәлә тороуығыҙҙы билдәләгеҙ) яңырып, теләһә ниндәй эшкә әҙер булып һәм ҙур энтузиазм менән торам". Был команданы хис-тойғоға сорналған көслө теләк менән бирергә кәрәк. Һуңынан бер нисә секундҡа нисек итеп билдәләнгән ваҡытта тороуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ (был уйҙағы образда деталдәр ни тиклем күберәк -шул тиклем яҡшы) һәм үҙегеҙҙе нисек итеп иҫ киткес хис иткәнегеҙҙе тойоғоҙ. Бик аҙ ғына күнекмә үтһәгеҙ ҙә кәрәкле ваҡытта тора башларһығыҙ.

140. "Ҡайһы берәүҙәр әйберҙәрҙе нисек бар - шулай күрә һәм: "Ни өсөн?" тип һорай. Ә мин бер ваҡытта ла булмаған нәмәләр тураһында хыялланам һәм үҙ-үҙемдән: "Ә ни өсөн булмаҫҡа тейеш?" - тип һорайым тигән Джордж Бернард Шоу.

141. Тынысландырыусы медитация сифатын күтәреү өсөн түбәндәге ысулдарҙы ҡулланығыҙ:

- Медитация менән көндөң бер үк ваҡытында, бер үк урында шөғөлләнегеҙ. Аңығыҙ һеҙ ошо урынға тороу менән шунда уҡ тынысланыу һәләтенә инергә өйрәнәсәк.

- Һис һүҙһеҙ, таң - медитация өсөн иң һөҙөмтәле ваҡыт. Һинд йогтары таң алдының тылсымлы үҙенсәлектәргә эйә булыуҙарын билдәләп, улар ныҡ тынысланыуға ярҙам итә, ти.

- Медитация алдынан түбәндәге инаныуҙы ҡулланып: "Хәҙер мин иғтибарымды туплап, тынысланасаҡмын", - тип, үҙегеҙгә бойороғоҙ.

- Әгәр башығыҙҙа ниндәйҙер уйҙар барлыҡҡа килһә, уларҙы ҡыумағыҙ, ә болот кеүек талғын ғына ағып, күк йөҙөн асырға мөмкинлек бирегеҙ. Аңығыҙҙы тыныс, бер генә шаҙраһы ла булмаған күл итеп күҙаллағыҙ.

- Ошо халәттә тәүҙә 10 минут ултырығыҙ, артабан был ваҡытты бер нисә күнекмә аша берәр минут өҫтәп, оҙайтығыҙ. Бер-ике ай шөғөлләнгәндән һуң бер ниндәй уй ҙа ошо халәтегеҙҙе боҙа алмаясаҡ һәм һеҙ быға бер ваҡытта ла кисермәгән эске тыныслыҡ тоясаҡһығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 13 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.10 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Анна Герман", 1-я и 3-я серии (16+)
00.30 Ночные новости
00.50 "Чрево". Драма (18+)
03.00 Новости
03.30 "Лучшие планы" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
